*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# БАТЫРША

## Тарихи-биографик китап



*А.Вәсилов һүрәте*

---

Аҙағы. Башы 4-6-сы һандарҙа

## Бер ҡыш ҡышлау

Юҡ, иртә ҡыуандылар, ахырыһы, был яҡ мосафирҙарҙы иртә ҡышы менән ҡаршыланы. Бер аулаҡ ауылға ҡуна төшкәндә һорашҡайнылар: “Мәҙрәсәләрҙә һабаҡ алалармы? Ғабдрахман мулла иҫән-һаумы?” – тип. “Остаз хәҙрәт иҫән, олоғайҙы инде. Оло мәҙрәсәбеҙ эшләй, әммә ләкин унда пашпуртһыҙ һабаҡҡа алмайҙар, тикшереүҙәр ҡаты”, – тип яуапланылар. Һис тә улайҙыр тип уйламағайнылар.

Шул саҡлы юл үткәс, кире боролорғамы ни, киттеләр ары. Көнө һалҡын. Ҡояш ҡолаҡланған. Гүйә, барыр юлдары киҫелгән, ҡайтыр юлдары бикләнгән. Аптырап Батырша юлдашына өндәште: “Әй, Яхия, атлар еребеҙ, барыр юлыбыҙ ҡалманы, ни ҡылайыҡ икән?” Яхия әйтте: “Эй, хәҙрәт, Алланың яҙмышылыр, урманға кереп, ҡар өҫтөнә ятып, асығып вә туңып үләйек!” Батырша әйтте: “Үҙебеҙҙе үҙебеҙ үлтермәк шәриғәтебеҙҙә харамдыр. Тере йәндә өмөт бар, Хаҡ тәғәләнең рәхмәтенән өмөттө киҫмәйек. Уйлашайыҡ. Яҙмышта яҙырын күрәйек. Ҡатығлыҡ сәбәпле һәрәйә халыҡ араһында ҡыш сыҡмаҡ мөмкин улмаҫтыр. Вә ләкин Надир командаһы ауылдарында шәкертбеҙ, тип аҙыҡ-нәфәҡә эстәйек. Ул нәфәҡәтебеҙҙе хилүәт ергә алып ҡыш сығыу хәстәрен ҡайғыртайыҡ! Йән биргәнгә Хоҙабыҙ, бәлкем, йүн бирер”.

Таныш яҡта таныштар күп, уның кире яҡтары бар хәҙер. Шәриҡтәштәренең күбеһе тирә-яҡ ауылдарына таралып, балалар үҫтереп, донъя көтөп ятҡан саҡтары. Араларында мулла, мәзиндәре, хәлфә, мөҙәрристәре лә барҙыр. Элекке шәриҡтәшен йәлләгәне, ҡурсырға тырышҡаны булыуы мөмкин, түрәләргә ярар ярамһаҡ монафиҡтары, тотоп биреүсе хөсөдтәре лә булмаҫ тимә араларында. Мөридтәренән мөртәттәр бөтмәҫ. Батыршаға хәҙер береһенә лә күренмәү, беленмәү хәйерле.

Күҙ терәп, инанып барыр кешеһе берәү генә – остазы Ғабдрахман ахун хәҙрәт. Уға ла тура барып инеү ярамаҫ. Шуға Тайһуйған ауылы урманына еткәс, Батырша юлдашын үҙен генә хәҙрәтен күрергә, һөйләшергә ебәрҙе. Уныһы кисләтә генә әйләнеп килде һәм ахундың үҙҙәрен кеше аяғы баҫылғас, төнөн көтәсәген әйтте. Шулай, ҡышҡы һыуыҡ төндә өшөптуңып, асҡа интегеп саҡ килеп инделәр хәҙрәттәре йортона.

Ғабдрахман ахунды йылдар, әлбиттә, ныҡ ҡына таушалтҡан: әүәл ҡабарып торған ҡара сәстәре тамам салланған һәм ныҡ йоҡарған. Түңәрәк һаҡалы ап-аҡ. Киң маңлайын арҡыры-буйға тәрән йыйырсыҡтар йырмалаған. Оҙонса кәүҙәһе ергә сүгә һәм бөкрәйә төшкән. Әммә үткер ҡарашы, йомшаҡ тауышы нәҡ элеккесә.

Ә бына остазы иң яҡын талибын ныҡ ауырлыҡ менән таныны, буғай. Ҡай бер һыҙаттарын ғына сырамытты ул башта: һонтор буйын, сикәһендәге оло миңен, ҡара ҡаштарын. Ҡасанғы үҫмер шәкерттән ҡарт кешегә әйләнгән. Һирәк мыйығы бар, һаҡалы юҡ, күҫә. Күрәһең, элекке аҡ йөҙө көлһыу һарғылт төҫтә – быныһы йонсоу, астан ҡырҡылыу ғәләмәтелер.

Юлдашы – шәкерте тип белә – утыҙҙан өҫтәлер, оҙонса буйлы, ҡара һаҡал-мыйыҡлы, ҡоңғорт йөҙлө, ҡара күҙле теремек әҙәм. Йәш булһа ла, шәкерте лә ныҡ йонсоу.

Мосафирҙарҙың шул хәлдә килеп инеүҙәре, уға төбәп йөрөүҙәре борсолдорҙо ла, шомландырҙы ла Ғабдрахман ахунды. Батыршаның оло болала ҡатнашы барлығын, ҡасып китеүен ишеткәйне ул. Шундай хәлендә остазын юллап килеүе бит әле уның, бәлә-ҡаза эйәртеп. Ғабдрахман хәҙрәт шом-асыуын тыштан былай һиҙгертмәҫкә тырышты, әммә элекке шәкертенең былдай хәлгә ҡалыуын, шулай йөрөүен хупламағанын тура әйтте, бүтәндәргә бәлә-ҡаза килтеререн дә йәшермәне. Был төндә әллә ни аңлашыу, оҙаҡ һөйләшеү булманы – инде таңға ауышҡан төн йөҙө, мосафирҙары эштән сығып арыған, асыҡҡан, туңған, һүҙ ҡайғыһы юҡ – ҡапылға тамаҡ ялғатты ла йоҡларға ҡушты хужа.

Иртәгәһенә, ғәйеп ҡунаҡтары әҙерәк баш-күҙ алғас, аулаҡта иркенләп һөйләштеләр. Хәҙрәте, остазлығына барып: "Һин дин әһеле, имаматлыҡ ҡылып, шәкерттәреңә һабаҡ биреп кенә йәшәргә ине, ахунлыҡ дәрәжәһен алмаға лайыҡ ине", – тип өгөт-нәсихәт рухында һүҙен башлағайны, элекке шәкерте быны бик ҡабулламай, киҫкен моназәрәгә инде китте.

— Дин әһеле булғаныма динде яҡлауға тотондом да инде, – тине ул. — Мулла-монтағайҙар, ғалим-ғөләмәләр яҡламаһа, уны кем яҡлар. Ҡара ғәуам-хәуас үҙе генәме? Мөьминдәрендә көсләп суҡындыралар, мәсеттәрендә ябалар, исламға ҡанса ноҡсанлыҡ ҡылалар – йәне бар мосолман нисек түҙеп торһон.

— Ҡыҙыу ҡан менән түгел, ә бола күтәреүҙе хасла хупламайым, сабырлыҡ менән, өгөт-вәғәз, хаҡ һүҙе менән һындырмаҡ лазым көфөрлөктө. Мөьминдең аһ-зарын, мәсеттәрҙә һәр көн һөйләр вәғәздәребеҙ ауазын, ислам әһелдәренең теләк-рәғәбәтен ишеттесе мәрхәмәтле падишаһыбыҙ. Әһрә илә ғәйре дингә керетмәҫкә ғали указын ҡылды, мосолмандарыбыҙҙы артыҡ һалымдарҙан, ҡыҫымдарҙан ҡотҡарҙы, анау ҡарағруһ Ҡанаштарын, әрхәрәйҙәрен эшенән алып һөрөп ебәрҙе. – Бармаҡтарын бөгә-бөгә, тағы бер нисә ташламаларын һанап китте Ғабдрахман ахун.

— Хәҙрәт, әгәр булһа, ундай указдары әллә вәғәз менән ингәнме тип уйлайһыңмы, ысынлай?! Тотторҙо, ти, муҡсаһын. Белгең килһә, шул ошо бола ҡуптарыуҙан булыр төп ғөҙөрө. Ташламаларының мәкере мосолманды мосолманға ташландырмаҡ, татарҙы башҡортҡа ҡаршы ҡуймаҡ – быуа ҡайҙа ғилләһе төптән уйлағанда. Ишеттем, Ҡазан татарҙары башҡорт яуына ҡаршы биш мең кеше ҡорал-яһау менән ебәрелгәндәр, тип. Дөрөҫ булһа, ана инде бер яман сәмәрәһе. Дине-көнө өсөн хаҡ мосолман, тау башҡорттары ҡаны-йәне менән түләй, хәҙрәт.

— Хуш, изге ниәт илә, мосолмандарым, тип, тәхризнамә яҙып кафырҙарға йыһат астырҙың, ти. Сәмәрәһе ни булды? Бары бола ҡупты, ил-йорт болғанды, мосолман ҡаны ҡойолдо. Ә үҙең? Мөхтәрәм имам, ахун булырға торған зат, ни хәлдә ҡалдың?

— Монафиҡтар боҙҙо эште. Мосолман иттифағына иҡтиҡат иттем. Дине вә көнө өсөн мөьмин йәнен фиҙа ҡылырға әҙерҙер тип өмөтләнгәйнем.

— Тәүбәгә ҡайтырға кәрәк, Баһадиршаһ, әгәр һуң булмаһа.

— Ошо бисара хәлемдә кәңәшкә тип, ары ни ҡылмаға инде тип, һинең шәфҡәтеңә, ярҙамыңа мохтаж ғисьянлы ғажиз йәнем.

Һүҙ көрәштерергә – мәжәдәләгә инеп киткән ҡунағының былай ҡапыл һыныуына күңеле булған хужа һөйләшеүҙе нәҡ ошо яйға көйләргә ашыҡты. Остаз менән шәкерт хәҙер үҙҙәренең донъяға ҡараш йәһәтенән дә бөтөнләй икенсе әҙәмдәр икәнлектәрен тиҙ тойҙолар, буғай.

— Ғажизлыҡтан йән ғазый, бисаранан ни сара тигәндәй, инде ни ҡылмаҡта ниәтең? Минең ярҙамым ниҙәлер? – шулай төп әхүәлгә күсерҙе ахун.

— Бисара хәлебеҙҙе күреп тораһың, хәҙрәт, — әхүәленә күрә тауышы ла әкрен ине Батыршаның. — Ул-был баҫылғансы ошо тарафтарҙа ҡыш сығырға ине нисек тә.

— Үҙеңде тотоп биргән кешегә ярлыҡаш тәғәйен икәнлеген беләһеңме икән?

— Беләм. Белгәнгә лә күҙ терәп килдем үҙеңә. Белгән-күргән ер. Ышаныслыраҡ яҡ тип.

— Был тарафтарҙа ла боласыларҙы эҙләү, тәфтиштәр бара. Мәҙрәсәмдә пашпуртһыҙ ситтән шәкерттәр тотмаҡ, сит-яттарҙы хатта ҡундырмаҡ мөмкин түгел. Беҙҙең яҡтарҙа ҡышлай алыуығыҙҙы, ай-һай, белмәйем. Ҡурҡыныс. Һине халыҡ танып тора, күрһәләр – бөттөң. Батырасаҡтар, башыңды ашаясаҡтар. Йәшереп аҫрар булһам, минең үҙ башыма. Ахун мәшһүр зат тип тормаҫтар.

Остазы баш тартырға, бәләһенән баш-аяҡ тип, үҙҙәренән тиҙерәк ҡотолорға теләй, ахыры, тип, Батырша киҫә һораны:

— Нишләйек һуң, хәҙрәт? Аҡыллы кәңәшеңде бир, ярҙам ҡыл!

Мосафирҙарынан күптән көткән һорауына Ғабдрахман ахун ҡапыл аптырай ҡалды, нисек әйтергә тип, уйланып торҙо берауыҡ.

— Кеше күҙенә күренеп йәшәүҙе уйларға ла ярамай. Тайһуйған – оло мәҙрәсәле ауыл, шәкерттәр, халыҡ ҡайнашып тора, үҙе аяҡ аҫты. Йәшенеп йәшәргә тигәндә лә, оло юл өҫтөндәге ауылдар хәүефле. Өҙләкһеҙ йөрөп яталар, шымсыһы-ние, темеҫкенеүсеһе күп хәҙер. Кеше баҫмаҫтай аулағыраҡ урындарҙы һайламағанда? Ҡайҙа? Нисегерәк? Әле генә өҙөп әйтеүе ситен. Беҙ былайтайыҡ булмаһа: һөйләшеүҙе туҡтатып торайыҡ. Мине юғалтҡандарҙыр, шик төшмәһен. Бер-ике көнгә ошо йылы быҙау өйөндә йәшәп торорһоғоҙ. Һеҙҙе бер кем күрмәҫкә, белмәҫкә тейеш. Белһәләр, барыбыҙ ҙа бөттөк. Өй тыштан бикле булыр, ашарға килтерелер, — ошолай һүҙҙе тамамланы ла тәүлектән артыҡ юғалып торҙо ахун.

Икенсе көнөнә кисләтә оло толоп кейгән бер әҙәм менән килеп керҙеләр икәүләп, ишектәге йоҙаҡты шылтырата аса-аса. Юлдашы сүсәнәк һаҡаллы, быслығыраҡ күҙле, самаса ҡырҡтар тирәһендәге әҙәм. Ул ахундың Ғәбделислам исемле улы булып сыҡты.

— Уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та бына әҙәм йәнле улым Ғәбделислам илә шундай фәһем фекеранаға килдек, кем, Баһадиршаһ, һеҙҙе ул йәшәгән аулағыраҡ Иҫке ауылға йәшереп ҡарамаға, – шулай уртаға һалды һүҙен Ғабдрахман үҙе. – Мәғлүм ки, ҡышҡы һыуыҡта аҙаштырылып сит ишек төбөнә килгән бесәйҙе лә ҡыуып ебәрмәк гонаһ, ә бәндәләргә бер-береһенә ярҙамлашмаҡ матлуб. Һәр хәлдә, хәҡир шәкертеңә важип ғәмәл тиеп.

— Хәйер хаҡыңды ташламауыңа мең рәхмәт, остазым!

— Ашыҡмай тор рәхмәтеңә, хоҙауәндә. Әүәл әйткәнемсә, һеҙҙе кеше күҙе алдында аҫрамаҡ мөмкин түгел. Шуңар былай ҡарарландыҡ: Иҫке ауылдың ярым ташландыҡ мәсете бар. Ҡыш бикле тора. Улым муллаһы вә мөтәүәллие урынына уға хужа. Мәсеттең алғы баҙында ер өй ҡаҙымаҡ хәжәттер. Көндөҙҙәрен шунда торорһоғоҙ, хәүефле саҡтарҙа ҡунғыларһығыҙ. Төп йәшәмәк урынығыҙ Ғәбделисламдың йылы мал өйө булыр. Унда ла бер кемгә күренмәй, бер ҡайҙа сыҡмай тороу шарттыр. Бүтәнсә ни сара, бисара мосафирҙың көнгөнәһе ят мөҡим (ситтә оҙаҡ йәшәр мосафир) хөкөмөндәлер шәй.

— Һәммәһенә разыйбыҙ, остазым. Ҡышты ғына имен сығырға, ҡара ергә баҫырға яҙһын бисараларыңа. – Икеһенең исеменән дә шулай тине Батырша. Әңгәмәгә шаһит булып күберәк һүҙһеҙ ултырған юлдашы Яхия был юлы башын ҡат-ҡат эйеү ишараһы яһаны. Ризалығы ла, рәхмәте лә шул ине инде уның.

Мосафирҙарҙың етер ерҙәренә тиҙерәк еткәне яҡшы. Аттары әҙер торған. Икеһе лә ахун һибә ҡылған тундарын кейеп, санаға ултырмаға сыҡһалар, унда урын-ер, юрған-мендәр әйберҙәре һалынған. Төн йөҙөндә йәһәтерәк оҙатып ебәреүҙе хәйерле күрҙе ахун.

Шулай баҙрап торған йондоҙло төн ҡата Зәй буйынан егерме саҡырым түбән ятҡан яңы ергә – Иҫке ауылға еттеләр, Ғәбделисламдың тәғәйен мал өйөнә килеп урынлаштылар мосафирҙарыбыҙ. Теләк доғалары гел уңай килде, буғай: йәшәр ерҙәренә мәсете йәнәшә, алғы баҙында өс-дүрт көн эсендә ер өйөн ҡаҙып инделәр, өҫтән һалҡын үтмәҫлек итеп ҡалын яптылар, ике ҡат ағас ишеген, ятыр-торор урынерен, сыуал һымағыраҡ ут-усағын рәтләнеләр. Ҡыштың ҡыҫҡа көнөн нисек етте булһа ла ошо мәсет баҙы өйөндә, төндәрен йәнәштәге мал өйөндә йылынып, ашап-эсеп, йоҡлап тереклек итә башланылар.

Шуны күрҙеләр һәм тора-бара шуға күнектеләр: ашап-эсер, ятыптoрор урындары – буйы дүрт сажиндан артығыраҡ, иңе ике сажин самаһы иркен бурама өй. Уртала сыуалы, һыу ҡайнатыр усағы бар. Ике стена буйлай йомро ағастарҙан яһалған тар һике. Иҙәне – ер. Бәләкәй генә тәҙрә йораты бар. Көҙләтә йә яңы тыуған быҙауҙар, һарыҡ бәрәстәре аҫрала; быҙау, бәрәс араһында, еҫ-ҡоҫтары эсендә йәшәүҙәре еңел түгел түгелен, тик йылы һөйәк һындырмай, күнәһең. Шуларҙы ҡарашып, һыуын йылытып, ашарҙарын-ниҙәрен әҙерләшеп торғас, тәүлектәр үткәне лә артыҡ һиҙелмәй. Кисен-иртән хужа үҙе инеп сыға, йылы аш-һыуын килтерә. Аҙна-ун көн һайын йылы мунсаһы ла эләгә. Биш ваҡыт намаҙы шартынса уҡыла. Бүтән ғибәҙәтен-ниен ҡылмаға, Ҡөрьән сыҡмаға ваҡыттары әллә ни хәтле. Ҡаңғыр-көңгөр һөйләшеп тә ваҡыт тиҙ уҙа. Төрлөһөнә күнегә, эйәләшә икән әҙәм тигәнең.

Кистәрен кергәндә Ғәбделислам ҡайсаҡ байтаҡ ҡына ултырып ташлай. Ауыл хәлдәрен, донъя әхүәлдәрен һөйләй, дин ғилеменә, фәлсәфәһенә лә инеп киткеләй – тел сарларға әүәҫ. Уның аша Иҫке ауылдың тарихын, хәҙергеһен, бар кешеләрен белеп бөттөләр. Батырша шәкерт йылдарында гөрләп торған был Иҫке Надир ауылы хәҙер таралып бөтөп бара икән шул. Егерме ике генә өй ҡалған  ти. Ҡасандыр ике мәхәлләле, старши-

налы ауыл ине. Надир Уразембәт старшинаһы менән ауылдың күпселеге яңы урынға – Яңы Надир ауылына күскән. Иҫкеһендә шул күсенә алмаҫ ҡарт-ҡоро ҡалған. Кемдәрелер ата-бабаһы ерләнгән зыяраттан, нигеҙҙән айырылмаҫҡа ҡарар ҡылған. Ауылдың тамам бөтөрөнә инде икенсе сәбәп тә бар икән. Былтырлы-быйыллы Герасим тигән Сембер куписы ошо тирәлә баҡыр заводы һалмаға ер һатып алырға килешкән Надир старшина менән. Иҫке ауылдың ҡалған кешеләре Шишмә йылғаһы буйына, Сөгөшлө тамағы янына күсергә тейеш, ти. Шуға бөгөн-иртәгә юҡҡа сығыр Иҫке ауыл түрә-һәрә аяҡ та баҫмаҫ ташландыҡ, онотолоп барған кескәй кәрйә, имеш. Сит-ят күҙҙәрҙән әллә ни шик-фәлән юҡ хәҙер уға. Ауылдың ҡарт-ҡороһо күреп-йөрөп бармаҫ. Шуғамылыр, бигерәк тә ауыл ҡышҡы бурандарҙа юлдар өҙөлөп ҡар эсендә ҡалғас, Ғәбделисламдың үҙе ыңғайына ҡасҡын моҡиддары иркенләберәк алдылар, мәсет баҙына бармай башланылар, өй араһында ла күренгеләнеләр.

Ғабдрахман ахун бер килгәнендә, яңы йыл башында Батырша менән Яхияны улының ҡунаҡ өйөнөң оло яғына уҡ саҡыртып индерҙе. Ҡәҙерле ҡунаҡтарҙай һыйланышып, оҙаҡ һөйләшеп, кәйеф-сафа ҡороп ултырҙылар. Һөйләшеп туймаҫ әңгәмә-мотағәләре донъя хәлдәренән дингә, диндән ғилемгә, сәнәиғ нәфисәгә, әҙәбиәттең үҙенә күсеп китте. Буҙа эсеп алғас, телдәре тағы ла асыла төштө.

Ахундың һүҙ араһында бер: “Был ғисьяна рухың вә ғәмәлең ҡайҙан килә, һис тә шулай булырһың тип уйламағайным”, — тигән уйынлы-ысынлы һорауына шәкерте: “Остаз хәҙрәт, йыраҡ китәһе түгел, һинең ғәҙеллекте яҡларға, хаҡлыҡты дауларға вәғәзләр дәрестәреңдән”, — тип яуап биргәс, ҡапылда аптырай ҙа, эсенән ғорурлана ла ҡуйғайны. “Баһадиршаһ исемеңә есемең тиң алайһа”, — тигән булды хуплағандай.

— Беҙҙең тарафта үткән йәй бер ғибрәтле генә ваҡиға булып алды, — тип ниндәйҙер серен сисергә теләгәндәй һүҙ башланы ахун. – Бөгөлмә төбәгендә Йософ атлы бер ғәҙел старшинабыҙ бар. Әйткәндәй, ул да минең мәҙрәсәне уҙған шәкерт, яҡын иткән пишҡәдәмем (уҡып та, уҡытып та йөрөгән шәкерт). Йософто пахутный старшина итеп пахутҡа ебәрәләр башҡорттар болаһын баҫышмаға. Шунан иҫән-һау, хатта бер кеше лә йәрәхәт-фәлән алмай аман ҡайтҡас, бәғзеләренән ишетәбеҙ, Йософ старшина беҙҙе һуғыштырманы, боласы башҡорттар яҡлы булды, имеш, тип. Китте шунан тикшереү-тәфтиш. Йософто Бөгөлмә түрәләре саҡырталар, ғәйепләмәксе итәләр. Ә пахудтағылар, бер-ике монафиҡтан башҡаһы, старшиналарына һүҙ тейҙермәйҙәр; һуғыштыҡ, ворҙарҙы ҡыуып барҙыҡ, тиҙәр. Минән, имам вә ахун кешенән, остазынан һоранылар, “ил-йортҡа хыянат ҡылыр зат түгел, иң ғәҙел әҙәм”, тинем. Һүҙемә иҡтиҡад иттеләр, ахырыһы, теймәнеләр, хөкөмгә тарттырманылар. Тәфтиш-фәлән баҫылғас, Йософ старшина үҙемә килеп әйтте, хәҙрәт, һин генә абруйың вә һүҙең илә башымды монафиҡтарҙан һаҡлап ҡалдың, үҙеңә донъялыҡта ла, әхирәттә лә ихтиразалар ҡылырмын, тип. Вә һәм һүҙләне хәҡиҡәттә нисек булғанын. Ялан башҡорттары быларҙың әтрәтенә бер саҡ сапҡын ҡылған икән. Әммә ләкин береһен дә һөңгө менән сәнсмәгәндәр, уҡтан атмағандар. Йософтоҡолар бер килке улар менән орошорға, бәрелешергә ҡәселләнгәндә

старшина тыйған, һуғыштырмаған. Шунда үҙенекеләрҙән бәғзеләре әйткән: “Эй, старшина, өҫтөңдән түрәләргә мәғлүм итербеҙ, вурҙар илә бер кәңәштә булғаныңды”, — тип. Старшина Йософ әйткән: “Минең яуабым әҙер, ундай һүҙегеҙҙән ҡурҡмайым”, — тип. Йософ ялан башҡорттары илә алдан килешкән, уларға ҡаршы әтрәтен һуғыштырмаған. Әлҡисса, бар старшиналарыбыҙ ҙа Йософ кеүек булһа, мосолмандарыбыҙҙы бик ҡыйырһыта алмаҫтар ине лә һуң.

— Бөтә эште ана шул монафиҡ старшиналар, һатлыҡ йәндәр боҙа, — уфтана биреп быны йөпләне Батырша.

— Баһадиршаһ, әйт әле, ярай, иҫән-һау ҡараға аяҡ баҫһағыҙ, нишләмәк булаһығыҙ? Ниндәй уй-ниәттәрең бар? — тип һораны ахун.

Быға Батырша әле ҡайһыһына туҡталырға белмәгән әлеге өс уй-ниәтен – ҡаҙаҡтар араһына китергәме, Урал, Азия яҡтарына, ислам даирәләренә йүнәлергәме, әллә пайтәхеткә падишаһ хозурына сәфәр ҡылырғамы икәнлеген – уларҙың уңай вә ауыр яҡтарын асып һалды.

Ҡыш бауыры оҙон. Ғинуар уҙып бара. Мөҡим Батыршалар ыҙа-ғазап сикмәй генә ҡыштың яртыһын ауҙарҙылар. Йылы өй, ваҡытында йылы аш, теләгәнсә йоҡо — бүтән ни кәрәк ҡасҡыларға. Хәҙер хужа елкәһенә генә һалышып та ятмайҙар, малын ҡарашалар, Батырша хатта бер һөнәргә маһирланып алды. Был яҡта ер майы күп икән, шишмә булып сығып ятҡан ерҙәре бар. Халыҡ шул майҙы дегет урынына файҙалана, ти, йәрәхәт-фәләнгә дауа урынына ла ҡулланалар. Батырша шул ер майына һыйыр майы ҡушып туғылап, бер дауа-дохын эшләп тапты, шул мал йәрәхәттәренә, мал сырхауҙарына килеште, бер-ике һөрттөмө, йә шыйыҡлап малға эсерҙеме — хайуанҡайҙар терелә лә китә. Тәҡүә йәндең ҡулы ла шифалы.

Шул ер майына бәйле Надир Уразембәт старшина хаҡында ҡыҙыҡлы хәбәрҙәр ишетте. Улы Йософ менән икеһе ер майы заводы төҙөп йөрөйҙәр, имеш. Шишмә-Суҡ һыуы баштарында. Хөкүмәттән завод төҙөмәгә алған ярлыҡ ҡағыҙы ла бар икән. Завод саҡлы завод менән булғас, Надир старшинаның старшиналыҡ эше менән шөғөлләнергә ваҡыты ла ҡалмайҙыр инде, эшен күберәк писары алып бара, ти. Уның ҡарауы, сит-ят кешеләргә тикшереү-фәлән хәҙер бигүк тойолмай. Батыршаларға быныһы күктән түгел, ерҙән ингән бәхет булып төштө. Әйтәләр, Хоҙайҙары бәндәләренә бәхеттәрен китек итеп тә бирер, тип. Хаҡтыр, Батыршаларҙың күпме теләп, ғәмәл ҡылып тапҡан бәхеткенәләре лә, оҙон ҡыш бауырының аҙағына ла етмәйенсә, февраль бурандары менән юҡҡа сыҡты ҡуйҙы.

Көтмәгәндә килде ул ғәрәсәт. Надир командаһына Яныш старшина тарафынан ебәрелгән тәфтиш булып килеп инде. Батыршаны тотмаға эҙләп, мәҙрәсәлә уҡыған төбәктәренә төбәп, унан Ҡазан губернаһына сыҡмаға тәғәйенләп махсус күндерелгән Мүклекүл ауылы муллаһы Исмәғил Рәжәп улы ине ул яуыз әҙәрмән. Батыршаға бисәһе яғынан күпмелер туған тейеш кеше ине ул хатта. Уның туғанлығы – шайтан нәҫеллеге. Иблис тоҡомо.

Сит яҡтың ҡарсығаһын үҙ яғының ҡарғаһы талай, тигәндәре шулдыр: Исмәғил Рәжәп үҙ яҡтарының һәр тошон, һәр әҙәмен яҡшы белгәнгә,

ҡарғалай тура ташланды ул ҡорбанына. Надир командаһының кешеләрен эшкә екте – яуыздың ҡулында губернатор ҡағыҙы, кеҫәһендә Батыршаны тотмаҡ әҙәмгә ярлыҡаш тәғәйен хаҡында ташҡа баҫма указы – тыңламай һис булмай, ҡайҙа ҡуша, шунда йүгерәләр, һәр ауыл һайын һунар эте шикелле еҫкәнеп, темеҫкенеп йөрөйҙәр. Шикләнгән кешеләренең өйөн тентейҙәр, ихаталарын бер итәләр, ҡыҫымға алалар, булырға тейеш тип ныҡып, ҡурҡытып йонсоталар. Тайһуйған мәҙрәсәһен инде аҫтын-өҫкә килтерҙеләр. Ғабдрахман ахундың ҡаты тороу арҡаһында ғына оло ғауғаға әйләнмәй ҡалды.

Шуныһы ҡотҡарҙы: был тараф Ғабдрахман ахундың ышаныслы тоғро шәкерттәре менән генә тулы түгел, уның үҙ ғаиләһе, туған-тыумасалары ла ифрат ишле. Ике ҡыҙы менән ете улы бар. Улар барыһы ла ғаиләле. Һәр береһе ошо Надир командаһындағы ауылдарҙа йә мулла, йә мәзин, йә булмаһа сотник. Власть улар ҡулында. Атаһы ни бойора – уларға закон. Һәр хәлдә, атаһы һүҙенән сыға торған, атаһына елямғыр тейҙерә торған итәғәтһеҙ зат-тоҡом түгел. Исмәғил Рәжәп үҙенең ике юлдашы менән Яңы Надир ауылына килеп төшкәнгә ярты көн дә үтмәй, уландары, туғандары аша хәүефле хәбәр аталарына барып юлығып, ахун бик һаҡ рәүештә Ғәбделислам улына еткереп, илтифатһыҙ йәшәй башлаған ҡасҡыларын тапмаҫ ерҙәренә йәшертеп тә ҡуйғайны инде.

Оҙаҡламай Иҫке ауылға ла етте Исмәғил иблис ҡуштандары. Йөрөнөләр, еҫкәнделәр, һораштылар, һис ни эҙ-фәлән дә тапманылар – китеп олаҡтылар. Мәлғүнлек бар, күҙ-колаҡка шымсыларын таптылар барыбер.

Бына шунан башланды ла инде Батыршаларҙың ярым тере, ярым үлек хәлендәге тереклеге. Күпмелер аҙыҡ-нәфәҡәһен алып бикләнделәр әлеге мәсет баҙындағы ер өй ишаратына. Ут яғырға ярамай, сығып йөрөү хаҡында һүҙ ҙә юҡ. Бер көн яталар, өс көн яталар, аҙна яталар. Тун-толоптары булһа ла, ҡышҡы ыҙғыр үҙенекен итә, ҡай саҡ һөйәктәргәсә үтә, аяҡ-ҡул туңа. Көн-төн ҡараңғылығы, тындан сасҡаулаған тынсыу дымлы һауаһы ыҙалата. Унда әҙәм түгел, балыҡ тонсор, тәлмәрйен ҡатып аяҡ һуҙыр.

Аҙна-ун көн эсендә ҡоролай ейгән аҙыҡ-нәфәҡәләре лә, һыуһынға ашар ҡарҙары ашҡаҙан-бауырҙарын, эсәк-бөйөрҙәрен бөрөп, тәҡәтһеҙ итергә тотона. Исмаһам, хәлдәрен килеп белгән, бер-ике ҡашыҡ булһа ла йылы аш, йылы һыу килтергән әҙәм заты юҡ. Им өсөн бер тамсы йылы ем булһасы. Былай барһа, тамам аҙна-ун көндән аяҡ һуҙаһы ғына ҡала. Шулай ер аҫтына күмелеп, ҡатып-туңып йән бирерҙәрме икән ни?

Йәндәре алҡымдарына етте тигәндә, икенсе йомала өҫтә бер йән эйәһенең ҡыймылдағаны беленде. Хәүефле түгел, хәйерле зат ҡына булғыры! Тоялар: тышҡы йоҙаҡ асылды, иҙән ҡапҡасы шығырланы, ер өйҙөң өҫкө ҡапҡасы күтәрелде. Өс тапҡыр тамаҡ ҡырған өн – йөрәктәренә йылы йүгерҙе – әһә, Ғәбделисламдың шартлы ымы – үҙҙәрен әжәлдән аралар Алла бәндәһе. Төштө ер аҫтарына Ғәбделислам, йылы аш, ҡайнар сәй килтергән, май шәм алған, һауыт-һабалары, иң кәрәге – кескәй ҡаҙаны бар. “Йәшәйбеҙ былай булғас” тигән өмөт керҙе әсхәбе ҡәһәф

(ер аҫты кешеләре) эйәләренә. Ҡотҡарыр хужаһының теленән аңланылар: өҫтә һаман хәүефле икән. Шымсылар Ғәбделисламдың һәр аҙымын күҙәтә йөрөйҙәр, һис яҙлыҡтырмайҙар, мәсетте лә һағалайҙар. Әле төн, ҡаты буран икән – тәүәккәлләүе шунан. Шуны киҫәтте: әле лә үтә һаҡ булырға кәрәк. Төнөн генә ут алып, һыу йылытырға мөмкин. Төтөн еҫе-фәләне ситкә сығырлыҡ булмаһын. Аҙна араһында йылы аш-һыуын төнләтә килтергеләй торор. Тотолмайыҡ, Хоҙай ҡотҡарһын, тиһәгеҙ, тағы бер ай, нисек тә генә булмаһын, түҙмәк матлуб – ахун улының оло үтенесе шул ине.

Әҙәм балаһы нишләһен, ҡош булып күккә осоп олғаша алмай, йәне сыҡҡансы түҙә. Батырша менән Яхия ла түҙҙе. Ер аҫтында ҡараңғылыҡ, тарлыҡ, ҡәбер һалҡынлығы, аслығы, сарсауы эсендә икеме, өсмө ай араһында, ҡоро һөйәк тә йән әҫәре ҡалған өрәк хәленә әүерелеп, ҡараға аяҡ баҫтылар. Улар, бер әкиәттә бәйән ҡылынғанса, күп йылдар ҡараңғы тау мәмерйәһендә йәшәп, әҙәм ҡиәфәтен юғалта башлаған әсхәбе ҡәһәф ише мәмерйә эйәләренә оҡшағайнылар. Кәүҙәләре ҡоро һөйәк тә тире, үҙҙәрен йөн баҫҡан, бетләп, ҡутырлап бөткәндәр, саҡ ғыжлап тын алалар, өҙлөкһөҙ йүткерәләр – ҡанса ыҙа-яфа, михнәт-зәхмәт күргәндәрен һөйләп бөтөрөрлөк тә, яҙып аңлатырлыҡ та түгел. Үҙе күргән, үҙе кисергән үҙе генә белһен инде тереләй ҡәбер ғазабы үткәндәрен.

Батырша менән Яхияның нисек ҡараға аяҡ баҫҡандары, йәй башында ҡара урманда нисек йән аҫрағандары тураһында асыҡ ҡына мәғлүмәт юҡ. Батырша үҙе аҙаҡ падишаһҡа яҙған атаҡлы хатында былай ти: “Аслыҡ вә һыуыҡлыҡ, вә тарлыҡ, вә ҡараңғылыҡ яфаһындан васиф ҡылғыһыҙ (аңлатып бөткөһөҙ) михнәттәр күреп, ҡоро һөйәктәремеҙҙәге йән әҫәре берлә йәйгә етештек. Ул тордоҡомоҙ ерҙән бер төндә сыҡтыҡ. Дәхи әүәлгесә Надир командаһы ауылдарында йөрөнөк. Аслыҡ зәхмәте сәбәбендән бер ай миҡдары тәнемеҙ шешеп, ҡеүәтһеҙ булып йөрөнөк. Кемдең шәкерттәре һеҙ, тип һораусыға, үҙегеҙ – шәкерттәребеҙ, тиә һөйләнек. Сөмбөлә йондоҙонаса халыҡ араһында шул рәүешсә йөрөнөк...”

Батшаға яҙған хатында Батырша үҙ башынан кискәндәрен барыһын да шымартып йә эҙ яҙлыҡтырып дөйөм рәүештә генә аңлата.

Фараз ителгәнсә, Батырша менән Яхия мәсет баҙы өйөнән яҙ сыҡҡас, Ғәбделисламдарҙың әлеге мал өйөндәме, әллә тағы хәүефһеҙерәк урындамы бер ай тирәһе аслыҡтан шешенеп йөрөй алмаҫлыҡ хәлдә ятҡан булырға тейештер. Шешенеү ҡайтып, тәнгә хәл кергәс, бер ни ҡәҙәр ит ҡунғас, һаман шул Иҫке ауылда йәшәүҙәре, йәғни тереклектәрен Зәй буйы урманына күсереүҙәре ихтимал. Яхияның хәйер-саҙаҡа һорашып аҙыҡ-нәфәҡә йыйыуы шуны һөйләй.

Батыршаның үҙенең, ҡырҡты үткән оло кешенең һәм был тирәлә үҙен һәр ҡорҙашы тиерлек таныр хәтәр ҡасҡы әҙәмдең, хәйер һорашып тамаҡ туйҙырҙым тигәне бик икеле. Юл яҙҙырмаҡ әмәле, моғайын.

Хатында яҙыуынса, Батырша менән Яхия егеүле аттарында Бигәш ауылына бармаҡсылар. Ә Иҫке ауыл менән Бигәш араһы барыһы унун ике саҡырым. Егеүле атлы арбаны ҡайҙан тапһындар – шул тараф-

тан урлап алһалар, хәҙер тотолорҙар ине – әлбиттә, Ғәбделислам үҙенекен алмаштырып юлсыларына бүләк иткән ат-арба. Уй-ниәттәре — ахунға һөйләгәндәренсә, Ҡазан аша Мәскәү яғына юлланмаҡ. Ә ҡайҙан паспорт алырға? Кем бирә уны? Һәр хәлдә, йәй уртаһында, сөмбөлә айы башында, Яхия менән Батырша Иҫке ауыл менән Бигәш ауылы араһында ҡапыл ғәйеп булмыш. Батырша Яхияны аты менән урманға әрәмәлек араһына йәшергән аҙыҡ-нәфәҡәләрен алырға һәм аттарына юллыҡ бесән сабып алырға ебәрә. Бер сәғәт самаһында әрәмәлектә ғауға ҡуба: “Шәкерт әрәмәгә ҡасты, тота алманыҡ”, – тигән тауыштар ишетә Батырша. Үҙе лә тотолоуҙан ҡурҡып, ҡасып китә. Яхия һыуға төшөп юғалғандай зымзыя ғәйеп. Ни тотолоу хәбәре, ни үле кәүҙәһе юҡ. Ғәйеп тик ғәйеп мәңге. Тағы осо-осҡа ялғанмаҫ тарих сере.

Батыршаның тарыҡҡан йәне, арыҡ тәнен ташлап китергә ынтылғандай, йә бисара ҡасҡын яҙмышҡынаһын еңеләйтергә теләгәндәй, хыял ҡошо булып, йыш ҡына шул күктәргә аша, ары әллә ҡайҙа ғәрештәргә олғаша. Шулай, баҫҡан еренән айырылып, хыялат күгендә йөҙә лә йөҙә. Бер миҙгел ҫәүер йондоҙонда – ҫәүер килмәй тәүер булмай (апрель етмәй көн йылытмай) – көндәр йылыға тартҡас, Иҫке ауыл ҡарттары мәсеткә йөрөй башлағайнылар. Шул көндәрҙең береһендә ғибрәтле ваҡиға һөйләнеләр. Батырша менән шәкерте баҙ өй ҡапҡастарын асып, һаҡ ҡына тыңлап торҙолар. “Кафырҙарҙың фетнәләре күплеге сәбәбендән тәҡәтһеҙбеҙ, – тип зарланышты улар. – Ҡотломбәт мирзаны (Ҡотломөхәммәт Тәвкилев) белгән замандан бирле һәр йыл нисә мәртәбә үҙенән ишетәбеҙ, Ырымбур губернаһы халайыҡтарына падишаһтың күп мәрхәмәттәре вә күп рәхимле указдары бар, тип. Ә беҙ, меҫкен халыҡ, шул ялғансы ҡарт дуңғыҙҙың һүҙенә ышанған булдыҡ. Ул әйткәнсә, беҙ бәндәләрҙең бисаралыҡ хәлдәре падишаһымыҙ хәҙрәттәренә ишеттерелер ҙә, беҙгә мәрхәмәттәре ирешеп, әүәлгесә донъя көтөштәребеҙҙә, тыныслыҡта вә еңеллектә булырбыҙ, имеш, тип. Көтәбеҙ, өҫтөбөҙгә бер ҡәтрә мәрхәмәт тамсыһы төшһәсе. Киреһенсә, көндән-көн ҡәһәр вә ләғнәт ямғыры артҡанын күрәбеҙ. Беҙҙең хәлебеҙ шул миҫалдалыр, кем, ҡиәмәт көнөндә тамуғ әһелдәре күрерҙәр: һауа йөҙөндә бер ҡара болот пәйҙә булғанын. Өмөтләнеп көтәләр: һүндерә, сарсауыбыҙҙы ҡандыра тип. Ни яман, тора торғас, ҡара болоттан таштар яуа башлар. Бәндәләрҙең ғазабы өҫтөнә ғазап артыр, өмөттәре киҫелер”.

Һүҙҙәрен Ҡөрьәндәге ғибрәтле аят менән ҡеүәтләйҙәр бит был ҡарттар, хәлгенәләрен тамуғҡа, киҫелер өмөткенәләрен миҫке таш ямғырға тиңләйҙәр.

Ғәҙәләт ямғыры көтөп тә ташлы ләғнәт ямғыры алмаҡ мосолмандарыбыҙҙың әллә үҙ гонаһтары күплегенәнме? Әллә шул яуыз мирзаның, губернаторҙың, монафиҡ түрәләренең золомлоҡ ҡылмаҡтары, бәндәләрҙең ноҡсанлыҡ хәлдәре падишаһ хәҙрәттәренә барып ирешмәүҙәнме? Аллаһы тәғәлә сабыр итһә, ерҙәге наибтары күрмәк-белмәк, ғәмәл ҡылмаҡ лазым ине бит.

Залим золом ҡылыр ти, шуны фәһем вә ғәҙәт итмәктәре шулдыр, бәлкем, һәмишә эш ғәмәлләре шунан ғына торған кеүек ис. Бәс, ул залимдар шуға һиммәтләнгән икән, беҙгә гелән баш эйеп яфа-ҡыҫым-

дарҙы кисерергәме ни, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ яҡламайынса? Шундай уйфәһемен ташламай һис тә Батырша.

Аҙаҡ батшаға яҙған хатында был хаҡта ҡәтғи карарға килеүен дә белдерер ул: “Ошбу уйланыуҙарҙан һуң фекер әйләнем, үс вә нәфрәт сәхрәһе өҫтөнән осоп, шунса ерҙәр вә манзаралар күрҙең имде. Ризаләт вә инабат сәхрәһенә сумып, ниҙәр күргәнеңде йәшермәй һөйләгел, тинем”.

Түрәләрҙең шау залимдарҙан тормағанын да белә ул. Ана Өфө ҡәлғәһендә Аксаков, Өфөнөң вице-губернаторы булған оло түрә, вә һәм Өфө воеводаһы, подполковник Люткин, Петр Степанович Бахметьев – Силәбе ҡәлғәһе коменданты, шундай камил вә һиммәтле түрәләр ине. Улар ҡулында булған өйәҙҙәге вә ҡәлғәләрҙәге залимдар, уларҙың ғәҙеллектәре вә ғәйрәтлеләре һибәтенән золомлоҡтар итмәгә тыйылалар ине. Йәғни бәғзеләре рәнйеткән тәҡдирҙә бәндәләренән ғәфү үтенер булды. Мәрхәмәтле Аксаков түрәһенә, ғәуамына ҡарамай, кем ғәйепле хаҡ хөкөм йөрөттө, түрәләренә саҡлы ҡулға алып хибескә ултыртып ҡуйғыланы. Алым алыусы эш эйәләре вә ғәйреләр алым алырға йөрьәт итмәнеләр. Халайыҡтар әлеге оло түрәләрҙең ғәҙеллек һиммәттәре бәрәкәтендә фәрәғәт вә истирәхәтләр илә йәшәп ҡалдылар күпмелер. Ғәуам-ғауастар Хаҡ тәғәлә өҫтәренә рәхмәт болоттары ебәреп, золомлоҡ һауаларынан ҡотҡарғанына шөкөрҙәр итте вә һәм игелекле түрәләренә донъялыҡта ла, әхирәттә лә изге теләктәр күндерҙе доғалар уҡып. Бәс, падишаһыбыҙ хәҙрәттәренең тәхет вәлиәтендә булған шундай ғәҙелдәрҙең һиммәттәре вә ғәйрәттәре илә халайыҡтар тигеҙлеккә вә инсафҡа килә икән, бәс, әгәр падишаһыбыҙ хәҙрәттәренә риғәйәләренең хәлдәре дөрөҫ еткерелеп торһа, падишаһыбыҙ хәҙрәттәре падишаһлыҡ һиммәттәре илә ғәҙәләт болото ебәреп мәрхәмәт ямғырын риғәйәләре өҫтөнә яуҙырһа, золомлоҡ уттары һүнмәҫ инеме лә риғәйәләре ҡәнәғәтлек тапмаҫ инеме ни? Шул саҡ залимдар ҙа әсәнән тыумыштай вә ғәләмәт баш күтәрмәмеш кеби булырлар ине, бәлкем. Шундай фекерҙәре башынан сыҡмай Батыршаның.

Тауыҡ төшөнә тары керә, тигәндәй, уйлағаны – төшөндә. Ил өҫтөндә рәхмәт болоттары йөрөп, ғәҙәләт ямғырҙары яуа, имеш. Йылғалары, күлдәре балыҡ менән тулы. Тауис ҡоштарҙан урман-тау шау-гөр килеп тора. Гүйә ожмах инде. Һыуһағандар сарсауҙарын ҡандырып кинәнә, асыҡҡандар ниғмәттәр ашап туйына. Рәхәт, ысын истирәхәт!.. Уянып китә, әлеге ер өйҙәре эсендә ята. Түҙеп торғоһоҙ һыуыҡ, күҙгә төрткөһөҙ ҡараңғы, тын алғыһыҙ тынсыу вә һаҫыҡ. Тамаҡ ас, ирендәр кипкән... Тәмле төшө бүленмәһә икәнсе, тамшанып, өшәнеп уянғандыр инде. Бындай хәлдәр йыш ҡабатланды, яман төштәр күреп һаташып уянған саҡтары күп булды.

Йәй уртаһы. Урман эсендә ҡыуышта ята. Төндәре хәҙер йылы. Тамағы хәленсә туҡ, сарсауы юҡ. Япа-яңғыҙы, барыр юлы, батыр күле лә юҡ кеүек. Берәҙәк кемгә хәжәт тә бисара йән кемгә кәрәк. Уны хәҙер кемдәрҙер ҡыумай ҙа, эҙләмәй ҙә, эҙәрләмәй ҙә төҫлө, киреһенсә, ул үҙе кемделер эҙләй, ҡайҙалыр ынтыла, япа-яңғыҙлығынан, аҙашып,

ҡаңғырып әллә ҡайҙарҙа уралыуҙарҙан ҡотолғоһо килә. Йәнен ҡотҡараһы, йән ғазаптарынан арынаһы ине. Бисараның талсыҡҡан кәүҙәһе, саҡ атлар аяҡтары ерҙә һөйрәлә, һүнмәгән рухы, хыялдары йәнә ҡанатланып күктәргә оса.

...Урман-туғайҙар ҡуйынында бер шишмә күреп ҡалды. Һыуһынды баҫмаҡ кәрәк. Сағралыҡтарҙы үтеп, шырлыҡтарҙы йырып яҡыныраҡ барһа, шишмә тигәне, Хоҙай ҡөҙрәте, әбелхәйәт – тереклек һыуы, имеш. Эргәһенә етмәксе, бер тамсы һыуын ауыҙ итмәксе ине – ни ғәләмәт, алдында бейек мәнег-кәртәләр, абайлап баҡһа, әбелхәйәт тирәләй, әшеүәтһеҙ кәүҙәһен, ҡойроғон уралтып, аждаһа ятмаһынмы. Сәскәләр араһына үрелгәйне, энәле һабаҡтарына тәндәре сәнселеп туҡталды. Үтеп сыҡҡыһыҙ ҡамауҙа торҙо ҡалды. Күҙен асһа, ҡыуыушта төш күреп ята, имеш. Ағас ботаҡтарына, шырлыҡтарға сыйғыланған ҡул-аяҡтары әсеткеләй, сарсауы баҫылмаған.

Ҡайһылыр хикәйәттәме, ҡиссаламы уҡығайны: әбелхәйәт шишмәһе бар икән тип. Ҡөрьән дә раҫлай бит. Әбелхәйәттән бер ҡәтрә (тамсы) эскән бәндә мәңге тере ҡала, имеш. Шул бер кәтрә донъя ғәләмендәге бар алтын-көмөш хазиналары тиң була алмаҫ шунса ҡиммәтлеләр. Ләкин ынйы-зөбәржәттәр дарья төбөндәлер, әбелхәйәт үҙе зөлмәт эсендәлер. Тереклек һыуын аждаһалар һаҡлайҙыр, юлын үткеһеҙ сәнскеле сәскәләр яланы ҡаплайҙыр.

Бәс, ғәҙәләт әбелхәйәт миҫалылыр, падишаһтар әбелхәйәттең бер шишмәһе миҫлелер вә ғәҙелдәрҙер. Падишаһ ҡырындағы вәзирҙәре әбелхәйәткә ағып төшөр күҙләүектәрҙер, йәғни ғәҙәләт һыуын туҡландыра вә ҡеүәтләндерә торғандарҙыр. Ә улар тирәһендәге яуыз түрәләре тереклек һыуына үткәрмәҫ залимат миҫалылыр. Хаҡтыр, бәлкем, әбелхәйәт һыуындай, вәзирҙәр ғәҙәләтле вә мәрхәмәтле шишмәләрелер. Хәлбүки былай икән, ҡәҙерҙәре вә шандары ла юғары вә әғлә булыр. Тимәк, мәнеғ-кәртәләрҙе үтә кисер көс-кәре лә олораҡ вә ҡеүәтлерәк улмаҡ лазым. Бәс, улай икәс, мин бәндә гәрбәтлек (ҡасып ситтә йөрөү) хәлендә залимдар зөлмәтен нисек үтәм дә ул, ғәҙәләт вә мәрхәмәт шишмәләренә ирешә аламмылыр-юҡмылыр, тип шөбһәләргә баттым, тиә уйға сума ул йәнә. Әгәр ошо гонаһлы вә ғисъянлы хәленә ҡарамай, бөйөк рух караптарға ултырып, дарьялар кисеп, падишаһ хозурына ирешһә, һәр төрлө мәниг вә зөлмәттәрҙе үтә кисә алһа, әбелхәйәткә, йәғни ғәҙәләт иленә, етә алмаҫ инеме ни? Падишаһ хәҙрәттәренең тәхет вәләйәтендә төрлө дин бәндәлектә бәрәбәрҙәрҙер. Бәс, алай икәс, ислам динен мәсхәрәләгән, мосолмандарҙы йәберләгән яуыздарҙың этлектәре падишаһ хәҙрәттәренә ишетелеп, риғәйәләрен яҡламаҫ инеме лә яуызлыҡ ҡылғандарҙы хөкөмгә тарттырмаҫ инеме ни? Шуға өмөтләнеп сабыр итеп күпме йәшәлде.

Йылдар үтте. Мосолмандарҙың аһ-зары падишаһҡа барып ишетелмәне, яуыз түрәләре вәләйәтенә үтеп инергә юл ҡуйманы. Былай булғас, мосолмандар донъяуи вә рухани хәлдәрен яҡлап баш күтәрмәй нишләһен. Шунда ғына, шау-шыу, дау ҡупҡас, аһ тауыштары падишаһ хозурына ишетелер, бәлкем. Залим золомдо тыуҙыра, золом йоломдо көҫәй ис.

Ғәҙеллек бер тантана итергә тейештер ҙә. Әбелхәйәттең ҡороуы, ҡояш нурының һүнеүе мөмкин түгелдер. Ҡөрьәндә яҙылмыштыр: "Әүгие Әбдел алла енәйәтәһем хәсәләт", йәғни: Аллаһы тәғәлә гонаһлы ғәмәлдәрен игелеккә әүерер. Ә падишаһтар Аллаһы тәғәләнең ерҙәге наибтарылыр. Бәс, шулай икән, гонаһлы эштәребеҙҙән тәүбә ҡылып үтенһәк, падишаһыбыҙ хәҙрәттәре ярлыҡар мәрхәмәттәренән вә мәғрифәттәренән мәхрүм итмәҫтер. Бәс, шулай икән, хәҙер ҙә падишаһ хәҙрәттәренә ғәҙеллек эстәп, мәрхәмәттәр өмөт итеп баш ормаҡ лазымдыр.

Шундай уйҙар эсендә йөҙә-йөҙә, бер фекергә килгәндәй инде Батырша: падишаһ хәҙрәттәре хозурына юл тотмаға. Иң туғрыһы вә хағы шул булыр. Был ҡарарын ул аҙаҡ батшаның үҙенә яҙған хатында ла төрлө яҡлап нигеҙләргә тырыша. "Падишаһымыҙ хәҙрәтләренән мәғдәләтләр (хаҡлыҡтар) вә мәрхәмәтләр эстәп, ауыр әхүәлебеҙҙә лә ҡыйыулыҡ табып, сәләхәтле һимmәтләр илә падишаһымыҙ йәнүбенә йүнәләйек, падишаһымыҙ хәҙрәтләренең изге атларыны вә ғәфәләт даналарыны ғәләмгә вә әнүәғ (төрлө) ҡәүемгә изһар иғлан итмәккә (белдерергә) һимmәтләр итдек", – тип тә яҙыр, татлы һүҙен йәлләмәйенсә ярлыҡау үтенер олуғ тәхет эйәһенән.

Уй-хыял ҡоштары күктәргә ашып, шулай падишаһ хәҙрәттәренең тәхет вәләйәтенә, зиннәтле һарайҙары хозурына барып етә, өмөт ҡанаттары күпмелер ҡеүәт биргәндәй итә Батыршаға.

## Батыршаның тотолоуы

Уй-хыялдары күктә, гонаһлы кәүҙәһе ерҙә шул бәндәнең. Берҙәнбер тоғро юлдашы Яхияны юғалтҡас, өмөт ҡанатҡайы ла ҡайырылып төштө Батыршаның. Бер үҙе хәҙер тере ҡулһыҙ ҡайҙа барһын? Ҡанат булыр аты ла юҡ. Йәйәүләп пайтәхеткә имен-аман яңғыҙың етә алмаҡ мөмкин түгел. Ғөрбәтлеккә ун ете йән бергә сығып киттеләр, инде япа-яңғыҙы ҡалды. Башта ай эсендә икешәрләп, бишәрләп шәкерттәре таралды, ғаиләһенән айырылды. Ҡасҡандарына инде йыл булып килгәндә, һуңғы тоғро юлдашынан яҙҙы.

Ғаиләһе ни хәлдә икән инде? Иҫән-амандармы? Ҡайҙалар? Өйҙә ҡалдырмағандарҙыр инде үҙҙәрен. Сабыйҙары менән нисек көн итә икән хәләл ефете? Үҙен ҡарғамаһалар ярар ине лә. Гонаһһыҙ сабыйҙарымдың, инсафлы зәүжәмдең күргән ыҙа-изаһтары, күрәсәктәре тотошлай үҙ өҫтөмә, Хоҙайым. Йән, выждан ғазабына түҙермен, үҙем бар яфаларҙы үткәрермен, белмәҫлеге, күрмәҫлеге ыҙалар ғүмер баҡый. Хәлдәрен булһа ла белергә ине. Шәкерт-талмидтарым ҡайҙарға таралышты икән? Ул гонаһһыҙ бәндәләрҙе лә ярлыҡаһалар ярай ҙа. Хибестәрҙә ябылып яталармы икән?..

Әүәл көҫөк-көҫөк иҫкә төшөп ыҙалаған ғазаптары инде килеп яңғыҙ башын, ҡан һауған йөрәген тулай биләп алды ла, талай ҙа талай, миңрәтә һануз тамам. Барыр ере, батыр күле юҡ, тиһә лә, тыуған тупрағы тарта хәҙер үҙен. Ғөрбәттә берәҙәк хәлендә тәнтерәкләп тереклек иткәнсе, үҙ тыуған яғыңа, тупрағыңа ҡайтып йығылмаҡ мәслихәтерәк-

тер. Шундай фекергә килһә лә килде, килмәһә лә юҡ – аяҡтары үҙ тарафтарына тартты. Башында яңы уй яралды: ни булһа, шул булыр – ҡайтайым. Старшина Сөләймәнгә барайым, үҙ ихтыярым илә ҡайтҡанымды иғлан ҡылайым. Араларында ышаныслыраҡ старшина шул. Унан Өфө ҡәлғәһенә илтергә үтенәйем. Унан Ырымбур етәйем. Өмөтһөҙ – шайтан ти, кем белә, бәлки, күнерҙәр. Падишаһыбыҙ хәҙрәттәренә ирештереүҙәрен талап итәйем. Фәһемләгәнде Аллаһы тәғәләбеҙ ҙә ташламам тигән.

Бәндә күңеле – ҡарурман, үҙе мәңге асылып бөтмәҫ сер. Ҡайһыһы хағыраҡ булғандыр – тупраҡ тартыуымы, ғаиләһенең яҙмыш хәлеме, әллә ошо уй-ниәтеме – Батырша август баштарында инде тыуған яғына борола. Һуңғы уй-ниәтен батшаға яҙған хатында әйтә – ни тиһәң дә бер нөктәгә һуҡтыра: нисек тә падишаһ әғзәм хәҙрәттәренә етмәгә ниәте.

Ҡарышҡа тура ҡайтып, яуыз Яныш ҡапҡанына ҡапмаҡта фәтүә юҡ, бире Әҙекәй ауылында Сөләймән старшинаға күренмәксе итә. Мишәр старшиналары араһында күпмелер инабатлыһы шул Сөләймән Динай улы булыр төҫлө.

Батырша Әҙекәйгә төнләтә килеп керә. Старшина өйҙәме-юҡмы, йортонда кемдәр барлығын белмәк өсөн уға тура барырға баҙмай. Яҡын танышы Ишназар өйөнә һуғыла. Өй эсендә ут-фәлән юҡ, күрәһең, йоҡоға ятҡандар, тәҙрәләренә килеп шаҡый. Ҡатын тауышы сыға:

– Кем бар унда?

– Ишназар өйҙәме?

– Өйҙә юҡ, ҡырҙа бесән сабып яталар, иртәгә кискә генә ҡайта. – Әҙ генә торғас, тауыш тағы ҡабатланды: – Кем булаһың үҙең, ни йомошоң бар?

Батырша, яуап ҡайтармай, төн эсенә кереп сумды.

Төн менән инде ҡайҙа барырға, кемгә тәҙрә шаҡырға тағы? Төнөн кеше бимазалап, үҙеңде белдереп йөрөүҙең мәғәнәһе юҡтыр. Күрә – Ишназар йортона йәнәш кенә мәсет, шунда инеп төн ҡунмаҡ хәйерле. Ишеге лә бикһеҙ икән, эскә инеп, мәсеттең түбә таҡтаһын асып, ҡыйығы аҫтында ятып йоҡлай.

Йүнләп баш терәмәй тәүлекләп килеүҙәре ныҡ йонсотҡандыр, уянып китһә, иртәгәһе көнө кискә ауышҡансы йоҡлаған ҡуйған. Тыңлап ҡарай – урамда тауыш. Шул шау-шыу уятҡандыр ҙа әле үҙен. ”Ни ғәләмәт был? Мәсеткә ингәнде бер кем белмәгән, күрмәгән кеүек ине. Әҙекәйҙәр иманлы халыҡ тигән гоманым бар ине. Ни хикмәт икән?” – Шулай уйлап ала Батырша айбанып. Ҡыйыҡ аҫты тишегенән ҡараһа, мәсет тирәһе тулы халыҡ. Сөләймән старшина күренмәй. Тоторға йыйылыуҙары шул микән? Шунан: “Мәсетте яҡшылап ҡарарға кәрәк”, – тигән тауыштар ишетелә түбәндән. Мөрйә артына йәшеренергә өлгөрмәй ҙә ҡала, береһе түбә ҡапҡасын асып, Батыршаны күреп тә ҡала, һөрәнен дә һала:

— Бур бында!

Нишләргә? Таныш имамдары, үҙ ихтыяры менән яҙмышын Сөләймән старшина ҡулына тапшырырға тип килгәне, тыныс ҡына төшөргә, алдарына баҫырға ине. Теләһә ни эшләтһендәр, ҡалғаны улар ихтыяры. Быны

уйлап өлгөрҙөмө-юҡмы, әллә бөтөнләй башында ла булманымы, Батырша түбәнән эскә ҡапыл һикереп тә төшә, тәҙрәне ватып сығып, халыҡты өркөтә-бырғыта ҡасып та китә.

Башта бүрек, өҫтөндә иҫке камзул, ялан аяҡ — шул ҡараҡ инде, ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Өс-дүрт ир ҡыуа йүгерәләр артынан бурҙың. Теге башындағы бүркен, өҫтөндәге камзулын ташлап, еңелсәләп, яҡындағы ҡайынлыҡҡа шундай шәп йүгереп ҡаса, артына етерем дә тимә. Аптырағас, артынан ат менән ҡыуа төшәләр. Берәүһе – аты шәбе – урман ауыҙында ҡыуып етә. Әммә Батырша, бысағын сығарып, тегене яҡын да ебәрмәй. Ысҡынмаҡ итә, теге һыбай көйө юлына йәнә арҡыры төшә, яҫҡыш, һелтәнеш, ялтаныштар китә. Уңарсы арттағылар аттары менән ҡыуып етә, ҡасҡыны ҡамайҙар, тоталар. Бер кеше унлап һыбайлы менән нишләһен. Улар ҡулына, шулай аҙаҡҡаса алышып, ҡасҡы, бур ҡиәфәтендә бирелә.

Үҙҙәрен Батыршаны тотоусы итеп күрһәткән Сөләймән старшина үҙе, улы Дауыт, Рәсүл тигән берәү әллә үҙ ғәйрәтлектәрен, әллә ауырлыҡ менән ҡулға төшөрөүҙәрен көсәйтер өсөн шаштырып һөйләйҙәр, әллә нәҡ шулай булған, хәҙер аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын. Ә Батырша үҙе икенсе төрлөрәк итеп яҙа батшаға хатында: “Егерме миҡдары кеше артымдан ҡыуҙылар, етә алманылар, күп ер ҡалдылар. Күрҙем: бишалты кеше аттар менеп, ҡоралдар алып сыҡтылар. Уларҙы күргәс, Сөләймән өйө тарафына барҙым. Таныш түгел кешеләр икән: “Ниндәй кеше һин?” — тип һоранылар. “Мосолман”, – тинем. “Кем һин?” – тинеләр. “Сөләймән өйөндә танышырбыҙ”, — тинем. Күп кешеләр йыйылдылар. Сөләймән йортонан тышҡа сығып, ҡаршы килде.

Сөләймән старшина аҙаҡ һөйләүенсә, үҙе ат менән ҡыуып Батыршаны тотошҡан. Батыршаның яҙыуынса, Сөләймән уны тотолғастын өйөндә генә ҡаршы алған. Күрәһең, береһе шыттыра, икенсеһе шымарта. Һәр хәлдә, Батырша аҙаҡҡаса алышып, ҡасып китеп, көс-хәл менән генә тотола, үҙ ихтыяры менән бирелмәй.

Хәйерсегә ел ҡаршы, ти, бер кирегә китһә, китә шул. Батырша Әҙекәйҙә төндә умарта ватҡан бурҙы эҙләү ғауғаһына барып эләгә. Берәүҙе эҙләйҙәр, икенсене тоталар.

Сөләймән старшина йортона килтерәләр Батыршаны. Халыҡ уның атаҡлы имам хатиптары икәнлеген күреп, аптырап ҡала: “Эй, хәҙрәтебеҙ, вәлиниғмәтебеҙ, динебеҙҙең олуғы, күңелдәребеҙ сырағы, һин икәнеңде белмәнек, Хоҙайҙың тәҡдире, гонаһтарыбыҙ шомлоғо”, – тип үкенесле хәсрәт белдерәләр күптәр.

Батырша яуаплай: “Мин Хоҙайымдың хөкөмөнә вә ҡазаһына риза булып, был рәүешле тотҡон иткәс, хәсрәтләнмәйем. Бәс, һеҙҙең хаҡыңыҙға мең һум ярлыҡаш хаҡланып, мораттарығыҙ хасил булған икән, ни өсөн хәсрәттәр йыяһығыҙ? Ҡоро тел хәсрәтен”.

Сөләймән әйтте: “Эй, хәҙрәт, вә иллә, һине белмеш вә кәсед итмеш түгел инек. Вә ләкин ауылыбыҙҙа бер кешенең кемдер умарталарын ватып, балын урлаған сәбәпле ауылыбыҙҙы бөгәсә тикшереп тамам иткәндән һуң мәсетте тикшерергә мәзинде ебәргәйнем. Хоҙайҙың тәҡдире икән, һинең тотолоуың сәбәп булғандыр”.

Батырша төп ниәтен әйтте: “Эй, Сөләймән старшина, һиңә шуны мәғлүм итәм: минең хасса падишаһымыҙ хәҙрәттәренең үҙенә еткерергә тейешле һүҙҙәрем вә йомошом бар. Уны падишаһымыҙ хозурына ирештермәккә һис бер хәл имкән таба алмағанымдан һиңә күҙ төбәп килдем, һин мине үҙ ихтыярым вә теләгем илә Өфөгә илтһәң ине”.

Сөләймән һораны: “Ә ниңә кешеләребеҙҙе күргәс, тороп ҡастың?” Батырша әйтте: “Араларында һин булмаған сәбәпле ҡасырға мәжбүр булдым. Тотолған кеше хәлендә түгел, үҙ ихтыярым илә килеп мәғлүм ҡылырмын тигәндән. Хаҡ тәғәләнең хөкөмөләр инде, уларҙан ҡотолмаҡ мөмкин булманы. Үтенесем шулдыр: нишләмәк кәрәк, нисек тотолһам, шулай Өфө приказына мәғлүм итәһеңдер, һинең эш, әммә падишаһымыҙ хәҙрәттәренә кәрәкле һүҙем барлығын һиңә ни рәүешле мәғлүм ҡылғанымды камиллыҡ берлә Өфө приказына еткерең”.

Сөләймән әйтте: “Һине тотҡан кешегә мең һум ярлыҡаш тәхсис ҡылынған. Был хәтле хазинанан кем баш тартыр? Шул тиклем халайыҡтар алдында тотолмағың фаш икән, мин һине йәшереп ҡалдыра алмайым ис. Өфөгә илтермен, анда үҙ һүҙеңде камиллыҡ берлә мәғлүм итерһең”.

Батырша әйтте: “Мине йәшереп ҡал, тигәнем юҡ. Теләгем шул ғына: һәр эште үҙ урынында, үҙ мәртәбәһендә эшләмәк тейешлеләр. Мин падишаһымыҙ хәҙрәттәренә кәрәкле һүҙем вә йомошом барлығын һеҙҙәргә мәғлүм иткәнмен икән, шуны Өфө приказына минең әйткәнсә мәғлүм итеүеңде генә теләйем”.

Сөләймән әйтте: “Ярлыҡаштан яҙмаҡ ахмаҡлыҡ булыр ине, хәҙрәт. Минең старшиналыҡ бурысым һеҙҙе Өфө приказына имен-аман илтеп тапшырмаҡ”.

Аҙаҡ Батыршаның батшаға яҙған хатында ла теркәлер был Сөләймән өйөндә шаһиттар алдында һөйләшеү.

Ҡарамаҡта Сөләймән старшина былай йомшаҡ һөйләшкән кеүек, әммә ҡатыға ныҡ ултырта. Шул көнөндә үк улы Дауыт менән писаре Мөксинде рапорт илә Өфө ҡәлғәһенә саптырта ул, Батырша тотолдо тип. Батыршаның ҡул-аяғын шундуҡ бығаулатып, шул көнөнсә йәһәтләп, дүрт-биш атлы-ҡораллы һаҡсыһы менән үҙе тотҡондо Өфө илтмәгә сыға. Иләү халҡы бер ни белмәй, бер ни күрмәй ҡала.

Батыршаның шулай тотолмаҡ һәм Өфөгә оҙатылмаҡ көнө тарихҡа инер 1756 йылдың 8 августы ине.

Бер йылға яҡын ҡасҡын булып, төрлө михнәттәр күреп йөрөп, Батыршаның ошо көндән тотҡон хәлендә байтаҡ йылдарға һуҙылыр, ҡәлғәләр, ҡалалар, хибестәр, таш төрмәләр аша үтер, Өфөнән Ырымбурға, Ырымбурҙан Мәскәүгә, Мәскәүҙән Санкт-Петербургка етер, Шлиссельбург төрмәһе менән килеп осланыр мажаралы, фажиғәле юлы башланыр.

Теләһәләр, тотҡонға ла күпте еткерә алалар икән. Өфөгә килтерешләй һаҡсыларының береһе шундай хәбәр ирештерҙе: “Гәйнә тарафлы халайыҡтар аҙ ғына өлгөрмәй ҡалдылар, кисеүерәк юлыктылар беҙҙең яҡҡа, – тине ул ҡарауыл сағында бышылдап. – Үкенес, хәҙрәт,

ҡасып киттегеҙ. Һеҙгә ирешһәләр, Яныштарға көн бөткән ине". Үкенесле тауыш менән шуныһын да әйтте: "Беҙ һине, хәҙрәт, был яҡынтирәләрҙәлер тип уйламай инек. Ислам даирәләренә киткәндер, ғәскәр килтерер, мосолмандарыбыҙға ярҙамға тип".

Бынан һуң Ҡормаш ауылында ҡуна туҡталғанда килеттән ҡарауылсыларын сығарып, Сөләймән старшина үҙе инеп һөйләште: "Вәлиниғмәт, күңелегеҙгә рәнйеү килтермәгеҙ, беҙҙең һеҙгә яманлыҡ ҡәседебеҙ юҡтыр, – тине ул. – Һинең элгәре кисте мәсеттә ас көн уҙҙырып, икенсе кисенә яҡын Ишназарҙың әсәһе миңә килеп мәғлүм итеүенән һинең төндә мәсеткә кергәнлегеңде белдем. Ләкин әлеге ҡараҡтыр тип фараз ҡылдым. Шуңар биғәйбә, һинең үтенес һүҙең хаҡтыр, вә ләкин күңелеңә рәнйеү килтермә, мин уны әйтә алмайым. Һин үҙең фәһем эйәһе, һине "үҙе килде, үҙ ихтыяры илә" тиеүҙә беҙгә файҙаһы юҡ, вә һәм үҙеңә лә юҡтыр. Анын өсөн һинең һүҙҙәреңде беҙ камиллай алмабыҙ, мәйтәм, һинең кәрәкле һүҙҙәрең мәғлүм итмәһәк тә, үҙ ауыҙыңдан еткерелгәс, аяҡ аҫка ташламаҫтарҙыр, шәйәт".

Һаҡсыһы әйткән һүҙҙәрҙе ул да ҡабатланы: "Беҙ һине Ислам даирәләрендә һиммәт итмәктәлер тип фәһемләй инек. Минең командамдан Сәлимйән берлә Ғәйнулла шул даирәләргә киткәндәр ине. Тамуҡтан ожмахҡа сыҡҡан тик рәхәт һөрөп йәшәйҙәр, тип ишетәбеҙ. Һине лә шулайыраҡ фәһемләгәйнек. – Тағы өҫтәне: — Әгәр падишаһымыҙ хәҙрәттәренә етешер булһағыҙ, мосолмандарымыҙҙың ни рәүешле яфалар сиккәнен мәғлүм әйләгеҙ, падишалар ғәҙәләттең, мәрхәмәттең мәғдәндәрелер, шәйәт, мәрхәмәттәренән мәхрүм булмаҫһығыҙ".

Өмөт итеп килгән старшинаһының тыштан әҙәм төҫлө булып та, эстән батины ғәйре хөсөт икәнлеге өсөн асыуы килеп, әллә ни һүҙ оҙайтманы Батырша. Ҡаты әйтеп үпкәләтһә, түрәләренә әллә ни ялғанлап, эште тамам боҙоп ҡуйыуын да уйланы.

## Фажиғәле юл

Хәйерһеҙ хәбәр тиҙ йөрөй. Батыршаның тотолоуы хаҡында Өфө канцелярияһы рапортын Неплюев генерал 12 августа алды. Алды ла, шундуҡ Батыршаны бик ҡаты ҡарауыл аҫтында Ырымбурға оҙатырға тигән фарманын биреп, Өфөгә пакет менән махсус курьерын ебәрҙе. Батыршаны Ырымбурға килтереүҙе иң ышаныслы кешегә тапшырырға, бер обер-офицер, 60 драгун тәғәйенләргә, өҫтәп йәнә 40 атлы казак командаһын ҡушырға бойорҙо. Өҫтәүенә, Батыршаны юлда һис кем күрмәҫтәй итеп, йәшерен рәүештә алып килергә, тотҡон эргәһендә ике ҡоралды һаҡсыға һис айырылмаҫҡа, ҡынынан һурылған ҡылыстарын һәр саҡ иңдәрендә тоторға, ҡул-аяҡ бығауҙары һәр ваҡыт, бигерәк тә төнгөлөгөн ҡарап-тикшерелеп торорға, тотҡон бер-бер тимер-фәлән табып, үҙен үлтереп ҡуйыуына ирек бирмәҫкә, тағы әллә ни саҡлы һаҡлыҡтар бәйнә-бәйнә бойорғайны. Әүәлге бер болала Атанғол тигән башҡорттоң юлда килтергәндә ашамай аслыҡтан үлеүен иҫкә алып, Батырша менән дә шундай хәл сыҡмаһын, тип иҫкәртелгәйне хатта. Иҫ киткес ҡурҡыныс, бығаулы көйө лә хәтәр булып күренгәндер инде генерал-

губернаторға тотҡон Батырша. Бығаулап алып барғандарын һиҙеп ҡалып, башҡорттар һөжүм ҡылып һалдырып алмағайҙары, тип тә бик хәүефләнә Неплюев. Ул хаҡта ла йәшерен күрһәтмәһендә онотмай.

Юҡҡа хәүефләнгән Иван Иванович. 23 августа Батырша йөҙ кешелек ҡораллы һаҡ аҫтында, кеше-ҡара күҙенә күрһәтмәй, төндәрен генә Ырымбурға имен-аман килтереп еткерелә.

Мөрәжәғәт яҙмаһы менән үҙен ныҡ һиҫкәндергән, губернаһын бола менән дер һелкенергә сәбәпсе атаҡлы Батырша, ниһайәт, губернатор ҡаршыһында. Береһе – уҡалы-суҡлы погон таҡҡан, эргәһендә офицер, секретарь, тылмас яранлы оло түрә – губернатор, икенсеһе – меҫкен бүрекле, ҡул-аяғы бығаулы боласы тотҡон. Шул көнөн, ҡан дошманының шундай хәлен бик күрәһе килгәйне генерал-губернаторҙың – насип булды.

Тәүге һорауҙарҙа уҡ Батырша үҙен батырҙарса ҡыйыу тота һәм генерал-губернатор ҡаршыһында бер үк һүҙҙе ҡабатлай: “Минең падишаһ хәҙрәттәренә еткерер һүҙҙәрем, уға ғына әйтер серҙәрем бар, минән бүтән һүҙ алмаҫһығыҙ”, – ти. Батыршаның тотҡон көйө дау-алышы шулай башлана. Неплюев килеп сыҡмаған допросын Сенатҡа яҙған рапортында икенсе һылтау менән аңлата.

“Вчера к вечеру он, вор Батырша, сюда привезен, которого он сам о том только спрашивал, он ли подлинно Уфимского уезду Сибирской дороги, команды старшины Яныша Абдуллина, деревни Карышевой и мещеряков мулла Абдулла Мязгяльдин, а по прозвищу Батырша, что он о себе точно и подтвердил, а затем больше ни о чем спрашивать его не приступил и не буду, доныне вышеписанное мое от 12 сего августа доношение от правительствующего Сената резолюция получена не будет, а между тем определено его содержать и будет содержан здесь в удобном и крепком месте, под накрепчайшем караулом”, – тип яҙа.

Күп тә үтмәй, 26 августа, Сенаттың Батыршаны Санкт-Петербургка ебәреү хаҡында махсус ҡарары сығып, 9 сентябрҙә Неплюев шул уҡ Сенаттың Батыршаны Йәшерен канцелярия ҡарамағына оҙатырға тигән указын да ҡулына ала.

Хөкүмәттең был ҡарары Ырымбурҙа әлегә бары Неплюевтың үҙенә генә мәғлүм. Унаһы ла серле, ярты-йорто мәғлүмәтле. Бик йәшерен рәүештә ебәрергә, тиелгән унда. Обер-офицерға Мәскәүгә яҡынлашҡанда ғына асып уҡыу шарты менән йәшерен указ пакеты тотторолаһағы, Батыршаны һәм уның шәкерттәрен, болала ҡатнашҡан яҡындарын инструкцияла Рогервикҡа ебәреләләр, тип күрһәтелгән. Яҙлыҡтырмалы серҙер инде быныһы.

Неплюев, хатта үҙ губерна канцелярияһында һис кем белмәһен өсөн, Батыршаны Петербургка оҙатыу хәстәрҙәрен фәҡәт шәхси секретары Коптяжев аша эшләтте башта. Тотҡон өҫтөнән бөтә юлдағы яуаплылыҡ кенәз капитан Волковскийға йөкмәтелгәс, бар эштәрен уға тапшырып ҡуйҙы. Ырымбур канцелярияһы ҡаҙнаһынан 500 һум аҡса бүлде, Батырша өсөн арба һатып алдыртты, өҫтөнә тун, кафтан, бүрек, күлдәкыштан, аяҡ кейеме, бейәләйҙәр хәстәрләтте. Мәскәү аша Санкт-Петер-

бургка хәтле сикһеҙ оҙон, айҙар буйы һуҙылмалы юл, көҙгө бысраҡ, ямғырлы, һыуыҡ көндәр – тотҡон өшөп, самаһыҙ ыҙа сигеп ауырып китмәй, иҫән-һау барып етергә тейеш. Бының өсөн капитан башы менән яуап бирә. Илтәһе ҡарауыл йәнә бер унтер-офицерҙан, капралдан һәм драгундан ғибәрәт. Үҙе бер атлы-ҡораллы каруан.

Ырымбурҙан конвой 10 сентябрҙә ҡуҙғалды. Бығаулы Батыршаны ике ат егелгән әлеге арбаға ултырттылар, уның ҡырында – бер унтер-офицер, капрал һәм ике драгун. Һаҡ, ҡарауыл ҡаты. Бығаулының һәр хәрәкәте күҙәтеү аҫтында, эргәһенән ике-өс кеше һис өҙөлмәй. Шул саҡлы һаҡлайҙар үҙен. Ырымбурҙан Һамарға тиклем ҡырҡ кешелек ҡоралы-һыбайлы ҡарауылы өҫтөнә тағы 20 драгун, 6 атлы казак алдырҙы капитан. Башҡорттарҙың һөжүм итеү ихтималынан ҡурҡҡандыр инде. Бер эскадрон саҡлы ҡоралы ҡарауылы менән шунса ҡурҡһынсы.

Ырымбурҙан Һамарға, Һамарҙан Арзамасҡа, Арзамастан Муромға, Муромдан Владимирға, Владимирҙан Мәскәүгә саҡлы ҡом-ташлы һикәлтәле тракт тигәндәрендә, көҙгө яуын-батҡағында бата-сума, туң ир-тәләрендә, ырашҡылы көндәрендә суғырмаланып ҡатҡан ерҙәрендә эс, йөрәк-бауырҙары өҙөлөрҙәй һелкенә-ватыла килә-килә, ыҙалы-ғазаплы юлдары айҙан артыҡҡа һуҙылды.

Конвой нисек кенә сын-яһау кейенмәһен, тамаҡтары туҡ булмаһын – таш түгел әҙәм заттары – ялы-ние кәрәк, эрерәк ҡалаға, тынысыраҡ ҡәлғәгә туҡталып, ҡайсаҡ өсәр-дүртәр көнгәсә тән яҙҙылар, көмөшкә һемерҙеләр. Офицерҙарҙың кеҫәләрендә прогон аҡсалары мул – типтерергә, ғиш-ғишрәт итергә лә әмәлен таптылар. Бығаулы тотҡондары ғына шул көрпәүле арбаһында йә күберәк таш подвалдарҙа төндәрен ҡата-туңа, ҡасан ҡуҙғалырҙар икән, тип тилмереп ятты. Инструкцияларында тәртип, һаҡсыллыҡ хаҡында күп нәмәләр яҙылған да ул яҙылыуын. “Бик абай күҙәтергә, тотҡон үҙе  менән бер-бер хәл эшләп ҡуймаһын, йылғаны аша сыҡҡанда һыуға һикереп бата, ҡаса күрмәһен” кеүек күрһәтмәләре лә бар – барын да тотоп, күҙәтеп бөтөп буламы ни уның. Айға яҡын ауыр юлда килеп арып-алйып, бәлтерәп тә, абайһыҙ-вайымһыҙ ғафилға әйләнеп тә бөтәләрҙер инде. Арбаһындағы һаҡсылары юлда ла йыш ҡына ойоп, ҡалғый киләләр. Ҡайһылары һуҙылып ятып уҡ йоҡоға тала. Арба тәгәрәй, һаҡсы йоҡо һимертә.

Батыршаның башына хәтәр уй килә: был кафырҙар йоҡлап киткәндәрендә ҡасып ҡарарғамы әллә? Башына бер төштөмө – тәүәккәлләргә инде ул. Нисектер бер тимер киҫәге, бысаҡ табып ала. Һаҡсылары йоҡлауынан, офицерҙары ғафиллыҡтарынан файҙаланып, ун көн эсендә аяҡтарындағы бығау тимерен игәп аса, ике көндә – ҡулдарындағын. Аса ла, мәлен тура килтереп, арбанан һикереп төшөп урманға ҡаса. Бер ер буйы самаһы йүгергәс кенә шарт-шорт атыш, һөрәнләп атлы-йәйәүле ҡыуыш китә. Батырша ҙур йылғаға килеп кипселә, ҡырҡлап драгун, офицерҙар уратып, тотҡондарын саҡ-саҡ тотоп ала. Бына һиңә каруан саҡлы конвой – бығаулы тотҡондарын саҡ ҡулдан ысҡындырмай ҡала. Әҙәм ояты – үҙ баштары китә ине. Был хәтәр мажараны конвой йомоп ҡала, рапорт та яҙылмай. Тотҡондарын да туҡмамай, бығауҙарын ғына яңырта, һаҡты көсәйтә.

Батырша батшаға яҙған хатында был мажара хаҡында әйтер ҙә, оҫта ғына итеп сәбәбен нигеҙләр уның. “Юлда килә торғас күрҙем мине алып килә торған кешеләрҙең ғафиллығын, – тип яҙыр ул. – Кәндемә фекер әйләнем, буйлә ризаһыҙлыҡ вә ихтыярһыҙлыҡ һәйәтемсә бармағындан, былар ҡулынан ҡотолоп, үҙ ризалығым вә ихтыярым илә барып, падишаһыбыҙ хәҙрәттәренә мәрамҙарыбыҙҙы бәян вә ғәян әйләмәк вәлирәк булыр[1], хасса үҙемдең әүәлге ниәтемсә вә теләгемсә бармыш улырмын, тип фекерләнем”.

Тотҡонлоҡ ҡулында ла һаман ҡасмаҡ әмәлен бер нөктәгә һуҡтыра бит Батырша – үҙ ихтыяры илә ирекле көйө батшаһы хозурына барып юлыҡмаға. Ышанмаҫ ерҙә ышана ҡуйырһың. Тотолмағына ла уның үҙенсә сәбәбе әҙер. “Бер уҡ атымы ҡәҙәр барған инем, алдымда бер ҡанса асыҡ ер вә бер олуғ йылға килде, – тиер ул хатында. – Гөман әйләнем: төшөмдә күрҙем, кем, йылға ошо имеш, ҡасмаҡ мөмкин дәгүлдер, тине. Ҡасманым. Артымдан килә торған кешеләрҙе көтөп алдым. Нисә фекерҙәр вә тәдбирҙәр әйләһәм дә, үҙ фекерем вә тәдбиремсә килә алманым, бәлки Хаҡ тәғәләнең тәҡдиренсә килдем”.

## Мәскәүҙә

Бәндә бер төрлө уйлай, тәҡдир яҙғанса сыға. Күрәһең, яҙмыштан һис уҙмыш юҡ. Ғазаплы-ыҙалы оҙон-оҙаҡ көҙгө юл үҙенекен иткәндер, Владимир ҡалаһына етмәҫтән, 6 октябрҙә, Батырша ҡапыл ҡаты сирләп китте, уң яҡ яңағы шешеп сыҡты, Мәскәүгә көс-хәл менән килтереп еткерҙеләр. Тотҡондоң үлеп-нитеп ҡуйыуынан ҡурҡып, Гриф исемле тәжрибәле докторға күрһәтергә, һауыҡҡансы Мәскәүҙә ҡалырға мәжбүр булдылар. Батыршаны тәүҙә Рогожский биҫтәһендә тоттолар, хәле бер ни тиклем арыуланғас, Йәшерен канцелярия янына күсерҙеләр ҙә, һорау ала башланылар.

Тағы Ырымбурҙағы губернатор ҡаршыһындағы хәл ҡабатланды – Батырша үҙ шәхесе хаҡындағы һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуап бирҙе лә, ни өсөн бола ҡубарылыуы, уның сәбәптәре тураһында һораша ғына башлағайнылар, элекке бер үк тәғбирҙе тәкрарланы: “Минең падишаһ хәҙрәттәренә генә еткерер һүҙҙәрем, әйтер серҙәрем бар, ғазим ғали йәнәптәре хозурына ириштерегеҙ. Бүтәндәргә, һис кемгә ул серҙәремде асаһым, яуап тотаһым юҡ”, – тине вә вәссәләм.

Төрлө дәрәжәләге түрәләр, следователдәр бәғзеһе йомалап, бәғзеһе ҡурҡытып, хатта туҡмап, язалап та шул һүҙҙәренән башҡа һис ни мәғлүмәт ала алманылар – таш ни таш, баш ни баш, серен һис асмаҫ. Сәйәси тотҡондар араһында ла быға ҡаса осрамаған хәл, вор башы менән императрицаның аудиенцияһын талап итһенсе.

Мәскәү вельможалары, атаҡлы следователдәре аптырашып кәңәшләштеләр ҙә, Йәшерен канцелярияның башлығы граф Алексей Иванович Шуваловтың үҙенә мөрәжәғәт итмәй бүтән сара тапманылар. Шулай, 1756 йылдың 28 октябрендә Йәшерен канцелярияның махсус

[1]Мәрамҙарыбыҙҙы бәян вә ғәян әйләмәк вәлирәк булыр — теләк-ниәттәребеҙҙе үҙебеҙ һөйләп аңлатып бирмәк лайыҡлыраҡ булыр.

указы барлыҡҡа килде. Унда императрица Елизавета Петровнаның әле ҡаты ауырыу сәбәпле Батыршаны ҡабул итә алмауы әйтелеп, аудиенцияға алмашҡа падишаһ хәҙрәттәре исеменә үҙ серҙәрен әйтеп биргән хат яҙырға тәҡдим ителгәйне һәм уның юғары адресатына мотлаҡ тапшырыласағы гарантияланғайны. Был указды Батыршаның үҙ ҡулына тоттороп күрһәтеп, Ильяс Моратов тигән тылмас һәм актуариус – үҙенә хәҙер ышанып ҡараған берҙән-бер Мәскәү мосолманы – эстәлеген тәржемә итеп аңлатып уҡ бирҙе. Яҡшы ҡағыҙға баҫылған, ҡуш башлы ҡарағош һүрәте төшөрөлгән, мөһөр һуғылған, графтың ҡултамғаһы һалынған ысын документ ине был.

Падишаһ хәҙрәттәренең үҙ ҡолона исемен атап әйткән вәғәҙәһенә, олуғ түрә графтың шунса бойороғона ышанмаҫҡа ярамайҙыр – күнде был указ тәҡдименә Батырша. Ятып ҡалғансы, атып ҡал. Әммә шундай шартты ҡуйҙы ул: хатты яҙасаҡ шул саҡта, әгәр уны үҙенең күҙе алдында махсус конвертҡа һалып, һурғыслап үҙ тамғаһы һалыныр мөһөр менән баҫып, һис кем асмай, падишаһ хәҙрәттәренең үҙ ҡулына шул көйө тапшырылыр булғанда. Ризалаштылар быға.

## Императрица Елизавета Петровнаға хаты

Иртәгәһен, 4 ноябрҙә, Йәшерен канцелярияның обер-секретары Михаил Хрущев менән Ильяс Моратов тылмас Батырша ятҡан төрмә камераһына инеп, вәғәҙәләшкән хатты яҙа башларға ҡуштылар. Үҙҙәре менән ҡара һауыты, биш-алты ҡаурый ҡәләм, аҡ ҡағыҙ, ҡаралама өсөн һорғолтораҡ ҡағыҙҙар индергәндәр, йәнәһе, һәммәһе әҙер, ултыр ҙа яҙ тиҙерәк.

Йәнә бер шартын иғлан итте Батырша: обер-секретарь хатты бер кемдән астырмай, мөһөрлө хәлендә падишаһ хәҙрәттәре ҡулына илтеп тотторорға ант итһен! Барыһына әҙер контора хеҙмәтсеһе – шаһиттар ҡаршыһында тәре тотоп суҡына-суҡына ант бирҙе, былай ҙа иҡрар ҡылды. Кафырҙың суҡынмыш анты мосолманға яраһа инде, мөстәкрәһ[2] булмаһа – шик ҡалды тотҡонда һаман.

Шулай, 1756 йылдың 4 ноябрендә императрица Елизавета Петровна исеменә тарихтарҙа ҡалыр атаҡлы табаҡ-табаҡ хатын – ғаризнамәһен яҙырға ултырҙы Батырша. Мәскәү хибесендә яҙышыр урыны тар ҡаҡ өҫтәл дә, арҡаһыҙ ултырғыс йораты. Аҙмаларының аҡҡа күсермәһе генә түгел, ҡараламалары ла йыртылмай, ташланмай бөртөгөнәсә һаҡланырға тейеш. Ҡараламаһында яҙған йөмлән, әйтер фекерең менән ҡәнәғәтләнмәй һыҙырға, төҙәтеп яҙырға мөмкин, әммә бысратырға аслан ярамай (хата фекере лә һаҡланһын, мотлаҡ сағыштырырға, уй ағышын самаларға). Күҙәтсенең күҙ алдында ғына яҙышыу шарт йәнә. Уға күҙәтсе итеп Мәскәүгә конвой менән алып килгән башлығы капитан Болховский кенәз тәғәйенләнгән тағы. Тотҡон бер ниндәй хоҡуғы юҡ көйө үҙенең ике шартына ризалашҡастарын, түрәләренең һәр шартын, ҡушҡанын һүҙһеҙ үтәргә тейеш, ҡарыулашыуҙа фәтеүә юҡ. Күҙ

[2]Мөстәкрәһ — килешмәҫ әҙәпһеҙлек.

алдында икән, күҙ алдында – ҡағыҙға төшөр уйҙарын күҙәтсеһе беләһе түгел, капитан кенәз тигәнең дә телдәрен түгел, ғәрәп яҙыуының әлебе таяҡ икәнен аңларлыҡ та мәғлүмәт-мөсөхәбәһе юҡ. Һуҡыр тауыҡҡа тары ни, кәбәк ни. Изге сәғәткә туры килһен, бисмиллаһын әйтеп, ғәмәл доғаларын уҡып, ҡулына ҡаурый ҡәләмен алды Батырша.

Баш-башланмыш бик еңелдән түгел икән, әллә күпме уйланып, ҡараламаһына айырым һүҙҙәрен яҙғылап, һыҙғылап байтаҡ ултырҙы ла, хоҙайым изге мәлгә, аҡҡа падишаһ хәҙрәттәренә төбәлер һүҙҙәрен башына эре итеп яҙып ҡуйҙы: "Ғиззәтлү дәүләтлү падишаһымыҙ ғәзими хәҙрәтләренә кем тәхет вәләйәтендәдүр рус мәмләкәте вә һәм ғәйреләр, вә һәм ғәйреләр, вә һәм ғәйреләр, вә һәм ғәйреләр".

Тәүге йөмләнән үк хат-ғаризнамәнең төп айышын әйтеп, шундуҡ диҡҡәтте тартмаҡлыҡ итеп башламаҡ лазым: "Бәян вә ғәян ҡыладур бәхре ғисъянда ғәрк улан хәкир бәндәсе Оренбурх губернасында үзендән хасил улан тәғилыҡ вә бағилыҡ һәйәтле мажрилар ни сәбәпдән вә ни ғилләтдән садир улмаҡны".

Үҙең, тәржемәи хәлең хаҡында бер-ике ауыҙ мәғлүмәт бирмәк хәжәттер: "Бу рәсемлә бән фәкир бәндә Баһадиршаһ Ғәли улы ғилем тәксил ҡылмаҡтан суң ике йыл миҡдары Гәйнә иләүендә Илеш мулла ауылында тордым ғилемлектә. Вә дәхи Исәт правинчасында Мөслим ыстаршина ауылында тордым түрт йыл миҡдары ғилемлектә. Андин суң үз еремә ҡайтуб Яныш командасында Ҡарыш ауылында тордым алты йыл ҡәдәре. Бу яд ҡылынмаҡ ауылларда тордым имаматдыҡ ҡылуб, мәҙрәсә тотуб, уғланнар уҡутуб вә һәм халайыҡтарға әмер мәғрүф вә нәһимөнкәрләр итуб..."

Мәсеттәрҙә имам хатип булып, мәҙрәсәләрҙә мөҙәрис вә остаз булып ғилем таратмаҡты, Алланың, уның ерҙәге наибтары – падишаһтарға тоғро ҡолдар икәнлеге, дин вә көн ғәмәлдәрендә ғәҙеллеккә өндәгәне хаҡында ла иҡрар итеп китмәк тейеш. Шунан ғына донъяла ғәҙеллекте боҙған боҙоҡ хәлдәр, яуыз түрәләр тураһында, көнкүрештең ауыр яҡтары, күргеҙелгән ыҙа-яфалары хаҡында һөйләргә күсмәк булыр. Тәғәйен, асыҡ, ышаныслы, дәлилле итеп теркәлергә тейеш барыһы. Һәр һүҙҙе үлсәп яҙырға.

Тигеҙ генә нәстәлиҡ ысулы менән ваҡ ҡына итеп ҡараламаға бер битте тултырып яҙҙы, инде шуны аҡҡа күсереп ҡарамаҡ кәрәк. Күсермәһе лә нәҡ бер бит булды.

Көн кисләй, ахырыһы, өҫтәге тимер рәшәткәле бәләкәй тәҙрәнән һүрән яҡты төшә башланы, камераһы ҡараңғыланды. Бөгөнгә етерҙер, күптән тотмаған ҡәләм, батша һынлы батшаға яуаплы ғаризнамә арыттыра ла икән – бигүк ашығаһы түгел, алдағы көндәре күптер әле.

Ә шул уҡ көндөң кисен Болховский кенәз Батыршаның яҙа башлауы, бер бит ҡаралама, бер бит аҡҡа күсермәһе теркәлеүе хаҡында Йәшерен канцелярия конторaһына рапортын яҙып тапшырҙы.

Иртәгәһен Батырша хәленең аруҡ арыуланғанын тойҙо. Шуға һәйбәт кәйеф менән эшенә ултырҙы, хаты ла ырамлы китте. Ырымбур губернаһында килеп сыҡҡан боланың сәбәптәрен аңлатырға тырышты ул. Шуларҙың береһе итеп мосолмандарҙы ислам диненән христиан ди-

ненә көсләп суҡындырыуҙан халыҡтың ризаһыҙлығын күрһәтте. Шуға өҫтәп, ислам диненән сығыусыларҙың, керәшендәрҙең яһаҡтарын динен һаҡлаған мосолмандар өҫтөнә һалыуын атаны. Тауҙарҙан-күлдәрҙән – Хоҙай хазинаһынан бушлай алына торған тоҙҙарҙы ҡәлғәләрҙән һатып алырға бойоролоуын халыҡ араһында тыуған ҙур ризаһыҙлыҡтарҙан һананы. Төрлө яуыз түрәләрҙең алым алып, артыҡ һалым һалып яфалатыуҙарын һанап китте. Бушлай ылау ҡыуып, линия хеҙмәтендә йөрөп халыҡтың ыҙалар сигеүен, ҡазалар күреүен, үҙ хужалыҡтары бөлөүен бер ҙур сәбәп итте.

Яҙған ҡараламаһын төҙәтеп, ҡыҫҡартыбыраҡ аҡҡа күсерҙе. Уныһы бит ярым самаһы булды. Өсөнсө, дүртенсе, тағы алдағы көндәренә эше йәнә ырамлыраҡ китте. Батырша үҙ башынан кискән, үҙ күҙҙәре менән күргән ғибрәтле, фажиғәле хәлдәрҙе яңынан күҙ алдына баҫтырып, йөрәктәре ғасабиланып, нисектер илһамланып һәм тулҡынланып аҡ ҡағыҙға төшөрҙө лә төшөрҙө, ҡаурый ҡәләме ҡайсаҡ ҡағыҙ өҫтөнән үҙенән-үҙе йүгереп бара ине. Яҙып ҡына өлгөр, уй-фекерҙәре ағыла ла ағыла. Мираҫ тәрикә малдарын хаҡ бүлеү эше менән ил-йорт, иләүҙәр араһында йөрөгәне, халыҡтан ишеткән төрлө аһ-зарлы, үсле-асыулы хәбәрҙәре, яуыз Яныш старшинаның этлектәре, ғәҙелһеҙлектәре, өйәҙ, губерна түрәләренең мутлыҡтары тураһында бәйнә-бәйнә яҙҙы. Мосолмандарға үҙ динен, үҙ көнйүнен яҡлап даулашмаға, яулашмаға өндәп үҙе мөрәжәғәт яҙғанын да йәшермәне. Унан Гәйнә иләүе менән бәйле ваҡиғалар, мажаралары тураһында ла ентекләп әйтте. Үҙе хаҡ тип һанаған хәлдәрҙе яҡланы, дин, хоҡуҡ, иҡтисад хаҡында бәхәстәргә инеп китте. Үҙенекен раҫланы, хаҡлығын аңлатырға тырышты, хаталанған икән – ғәфү үтенде.

Хат-ғаризнамәһенең төп уй-маҡсаты, әлбиттә, падишаһ әғзәм хәҙрәттәренән гонаһтары өсөн, болаға ҡатнашы барлығы өсөн ярлыҡау үтенеүҙән, олуғ заттың фәҡир ҡол бәндәһен түбәнселек менән кисереүен ялбарыуҙан ғибәрәт ине. Шуға ул падишаһына олуғлап йомарт һүҙҙәрен дә йәлләмәне, ил-дәүләт хаҡына үҙенә оҙон ғүмер теләп доғалар ҡылырға, изге теләктәрҙә йәшәргә вәғәҙәләрен бирҙе. “Ошбу фәҡир бәндә падишаһымыҙ хәҙрәтләренең мәрхәмәт даръясы ташҡан ваҡытҡа туғрыдымы икән йәки ҡәһәр уты ашҡан ваҡытта туғрыдымы икән дип, хәүеф илә рижа арасында хөммиләнмеш кеби зилзиләләнеб, падишаһымыҙ хәҙрәтенә баш килтереб торадыр вә доғалар ҡыладыр...” тип бөтөрә ул хатының аҙағын.

4 ноябрҙән 24 ноябргә тиклем, егерме көн буйы яҙҙы ул табаҡ-табаҡ был хат-ғаризнамәһен, ҙур өмөттәр бағлап, хаҡ ярлыҡауҙар көтөп, зариланып һәм ғасабиланып яҙҙы. Уға бар ғаҡыл көсөн, йөрәк ялҡынын һалырға тырышты, падишаһының миһырбанлығын уятыр күңел ҡылдарына ҡағылмаға ниәтләне. Бар өмөткенәһе шунда ине бисара йәндең.

Хат-ғаризнамә махсус конвертҡа һалынып, һурғыслы мөһөр баҫылып, ант эстәп обер-секретарь Михаил Хрущев ҡулына ышанып тапшырылды олуғ адресына илтеп ирештермәк өсөн.

Хаты китте, үҙе ҡалды хибесендә ятып...

Инде өмөт менән яуап көтәһе лә көтәһе...

## Юлдаш, фекерҙәштәре яҙмышы

“Ҡарт алашаға эйәргән тайҙар”, – тип тиргәне Яныш Батырша шәкерттәрен. Таймы, кем, остазы болаһына бағлыларын ауыр яҙмыш көтә ине. Батырша тотолоп, Ырымбур килтерелеүгә, бер йылға яҡын төрмәлә ятҡан ярандарын баш боласы артынан Петербургка конвой менән оҙатырға, тигән указ килде Сенаттан. Ун биш кеше ине улар. Гәйнә менән Ирәкте иләүҙәренән Сурағол Миңлебай, Нурый Боҫҡон, Көсөкбай Иманғол, Исхаҡ Мырҙалы, Аҡсура Яғытай, Исәт провинцияһынан Әхмәт Көсөк, Яныш командаһынан Мәксүт Ғайса менән Ырыҫҡол Ислам. Шәкерттәре: Сафар Йәғәфәр, Ибраһим Тимерғазы, Мирәхмәт Әхмәт, Мостафа Хәсән, Мөслим Ибраһим, Исмәғил Әпкәй, Дәүләтбай Көҫәғол. Былар Батыршаның иң яҡын ярандары хисабында. Ләкин Уса ҡәлғәһенән Өфөгә килтерергә тигәс, Гәйнәләге ихтилал үҙәгендә ҡайнаған Сурағол Миңлебай, Нурый Боҫҡон, Көсөкбай Имәнғол һәм Аҡсура Яғытай уҙамандарҙы Уса төрмәһендә язалап, туҡмап үлтергәндәре мәғлүм булды.

Иҫән ҡалған яран-шәкерттәренән ҡул-аяҡтары бығаулы ун бер кеше һаҡ аҫтында сентябрҙең урталарында Өфө ҡалаһынан Петербургка, Йәшерен канцелярия ҡарамағына оҙатылды. Мәскәү драгун полкы капитаны Леонтий Львов башлығындағы был конвой 14 ылауҙан, 12 атлы казак менән 24 йәйәүле драгундан ғибәрәт ине. Тотҡондарҙың эше буйынса йыл дауамында йыйылған рапорт, допрос, промемория, реестр, ведомость һәм резолюция ҡағыҙҙарын ҡалын пакет менән пайтәхеткә ебәрергә бойоролғайны; юлда үлеме, тереме ҡалалар, уларын да хәбәр итергә ҡушылғайны.

Был конвой ҙа, бигерәге Башҡортостан ерҙәре аша үткәндә, үтә һаҡ, бик йәшерен алып барылды, тотҡондар үҙҙәренең ҡайҙа, ни өсөн алып барылғанын да йүнләп бәлмәнеләр. Алыҫҡа, Рогервик тигән ергә һөргөнгә илтәләр, имеш, тигән хәбәр генә ҡолаҡтарына салынды. Ике ай буйы оҙон юлда көҙгө ямғыр-бысрағына өшәнеп, эшлектән сығып бөттөләр. Шәкерттәр – ярай йәшерәк – ул саҡлы бирешмәне, олораҡтарына ауыр ине. Бығаулы ҡулдары шешенеп, һалҡын тейҙереп, Мәксүт ҡаты ауырып китте, шунан күтәрелә алмай, юлда ыҙаланып йән бирҙе. Ҡалғандары мең михнәт менән ҡоро йәндәре генә ҡалып, пайтәхеткә етешеп, һалҡын, еүеш таш казематтарына кереп яттылар. Пайтәхет, имеш, ләхет ине казематтары.

Теге саҡты остаздары менән урманда йәшеренеп, аҙаҡ бынан кире ҡасып ҡайтып ҡына еңел ҡотолмаҡсы булғайнылар шикелле шәкерттәр. Һуңынан шул саҡлы ғазаптарға юлығырбыҙ тип баштарына ла килтермәгәйнеләр. Күрәһең, иңең менән эшләгәнде буйың менән күтәрергә тура килә.

Урмандан баштараҡ һыҙғандары – Ибраһим, Мирәхмәт, Сәфәрғәле, Мөслим – Яныш старшиналары алдына һорау бирергә баҫҡас, әллә үҙ түрәләренә ышанып, әллә ярлыҡауына өмөт бағлап, барыһын ярҙылар ҙа һалдылар; бер ауыҙҙан тиерлек бар ғәйепте остаздары өҫтөнә япһарҙылар. “Беҙҙе урманға көсләп алып китте, яу килә, тип ҡурҡытты, – тинеләр. – Гәйнәләр килеп етһә, иң беренсе Янышты үлтерәсәкмен,

командаһын ҡырасаҡбыҙ, тип әйтте", – тинеләр. Старшина үҙенә кәрәк ҡайһы бер нәмәләрҙе һорашып белеште лә: "Ҡарт алашаға эйәргән һеҙ тайҙарҙы әйтер инем... Ярай, ҡалғанын оло түрәләргә үҙегеҙ белгәнсә аңлатырһығыҙ", – тип Өфөгә тотто ла оҙатты үҙҙәрен. Бында ла бар ғәйепте Батыршаға япһарып, һыуҙан ҡоро сыҡмаҡсылар ине, ни ғәлләт, ике-өс айырылы ҡамсы менән ярырға тотонмаһындармы, ҡайһы ерең ҡысый, түҙеп кенә тор. Түҙерлекме, ике-өс һуғыуҙа күлдәктәре ярылып, арҡаларына буй-буй ҡандар һауа, тәкәт тотҡоһоҙ ауыртыуҙары йөрәктәрҙе телеп електәргә үтә. Өс-дүрт ҡамсынан инде аңың буталып, әйтмәç һүҙҙәреңде әйтер, булмағанды булды тиер хәл-әхмәлгә төшәһең икән. Йәнтәслимгә етәһеңме ни. Тын торалар бер аҙ. Алдында ауан ир, ҡулдарында ҡамсы, ым-ишара ғына булһын, хәҙер һыҙырырға әҙер. Хөкөмдар һорай: "Әйтәһеңме инде дөрөçөн?" – ти. "Әйтәм, барыһын да әйтәм!" – ти үҙенән-үҙе тел. "Батыршаның бунт сығарыуға йыйыныуын белдеңме?" – "Белдем". – "Ниңә старшинаңа әйтмәнең?" – "Әйтмәçкә ант иттерҙе, боҙһаң, бәддоғаһы, хатта үлтермәк менән ҡурҡытты". – "Ә бынан ҡурҡаһыңмы? (ҡамсыға ымлай, яуыз) әйт, улайһа, бунтҡа ҡатнашы бар бүтән әҙәмдәрҙе. Йә, кемдәр?!" Йән ғәзиз икән, тел һөйәкһеҙ, һораған беренә "шулаймы?" – "шулай", "фәлән дә фәлән" тип тик тора. Ни теләйҙәр – шуны әйтә, ни һорайҙар – шуны раçлай.

Араларында иң шыйығыраҡы Мостафа булып, ептең бер осо унан башланды булһа кәрәк. Бер-ике ҡамсынан уҡ ул ҡойолоп төштө лә телде һалды бар белгәнен. Шулай ептең бер осо сыҡҡас, китте ҡалғаны һүтелеп. Исмәғилдән, Мөслимдән, Ибраһимдан, бүтәндәренән шулай уҡ ҡамсылап, туҡмап, барыһын әйттереп бөттөләр, үҙ-ара күҙләштереп таныҡлаттылар. Шулай анттар боҙолдо, серҙәр асылды, төйөндәр сиселде.

Бер-ике ай эсендә Батыршаның болаға бәйле күп эштәре, Гәйнәләге бола, яҡын ярандары, шәкерттәрҙең урманда бергә күргән мажаралары тотҡондар ауыҙынан күбеһе Өфө провинция канцелярия түрәләренә, губерна үҙәгенең үҙенә яҡшы мәғлүм ине. Тотолғандарына инде тот та хөкөмөн сығар, яҙаһын бир. Ләкин оло түрәләр, хөкөм эйәләре ашыҡмай ине. Ата боласы Батырша үҙе тотолмаған, төп серҙәр әле сиселеп бөтмәгән, төп ғәйепленең үҙ дәлилдәре юҡ, күҙләштермәк, асыҡлап етмәк кәрәк.

Ә тотҡондар айҙар яталар, йыл яталар – хөкөмө лә, яҙаһы ла юҡ та юҡ. Йә хөкөмөн ҡылып, йә ярлыҡап ҡына ҡуймайҙар. Шәкерттәрҙең ғәйепкенәһе инде – кеше үлтермәгән, ил-йорт баçмаған – мөдәристәре менән ҡасып киткән йә ниндәйҙер йомошон үтәгән икән, тыңламай нишләһендәр, остаздары бит. Төрмәлә ятмаҡ – ваҡыт күп, баштарына төрлө уйҙар килә. Ҡылған ҡырын эштәре үкендерә инде, файҙа юҡ. Танмай, түҙмәй барыһын әйтеп бөттөләр – өçтәренә бәлә генә арттырҙылар, буғай. Белмәгәндең беләге тыныс, ти, белмәйем, тип кенә торһаларсы. Түҙерлек, сыҙарлыҡ булдымы ни туҡмауҙарына. Белмәгән – ҡотолған, белгән – тотолған, тигәндәре шулдыр. Ә нишләп остаздарының өлкән шәкерттәре юҡ араларында? Әллә хәҙрәттәре менән һаман бергәләрме икән бәғзеләре? Мөслим, би-

шәүһе бергә киткәйне, тигән ине ис. Исемдәрен әйттеләр, тотолһалар. Күҙләштермәй ҡалырҙар инеме ни?

...Ирektә, ирektә ине гел иҫләр шәриктәштәре. Үҙ бәхеттәре менән тыуғандарҙыр, күрәһең, ул бишәү: Ғәбделмоталип, Ғәбделғафар, Ғәбделкәрим, Мөхәммәтшәриф вә Ҡасим. Батыршаның ҡушыуы буйынса аҙыҡтүлек табып килергә тип киттеләр – шунан кире әйләнеп килмәнеләр. Килмәҫтәрен, кәйефтәрен остаздары самалай ине – шулай булды.

Өс аҙна урманда йәшеренеп йөрөнө был бишәү. Ниһайәт, Ҡариҙел буйы Башҡорт-Сура ауылына еттеләр. Туп-тура мәсеткә килделәр. Йома намаҙы ине. "Кем булаһығыҙ?" — тип һораны намаҙҙан сыҡҡан ҡарттар. "Батырша шәкерттәреме ни?" — тип һоранылар. "Эйе, бергә урманға ҡасҡайныҡ, остазыбыҙҙың рөхсәте менән киттек. Хәҙер Өфөгә барабыҙ, түрәләрҙән ғәфү үтенмәгә. Юл өйрәтегеҙ!" – тинеләр.

Старшиналары Яҡуп Сынмырҙа миһырбанлы әҙәм, ахырыһы, шәкерттәрҙең хәлен аңланы булыр: үҙҙәрендә ашатып-эсереп, өс-дүрт көн хәл йыйҙырып, әҙәм рәтенә килтереп, уҡыған мәҙрәсәләренә Ҡарышҡа илтте. Яныш старшинаға барып баш орҙолар: "Падишаһ хәҙрәттәре ҡаршыһында ҙур ғәйеплебеҙ, Батырша беҙҙе көсләп алып китте, бәддоға, үлем менән ҡурҡытты, беҙ, меҫкен шәкерттәреңде ғәфү ҡыл, ыстаршина хәҙрәтебеҙ", – тип ялбарҙылар. Яҡуп старшина ла Яныштан шәкерттәрҙе ярлыҡауын, бергә юллау яуабы килгәнсе ауылында порукала тотоп торорға һораны. Яҡуп старшина менән әллә әшнәлеге еңде, әллә күңеле йомшаны, ышаныуы ҡыйын, күнде бит Яныш быға. Һөйләшеп-килешеп, Ғәбделмоталипты – Кузьма Уразлы писарь, Ғәбделғафарҙы – Морат Туйгилде, Ғәбделкәримде – Исмәғил Рәжәп, Ҡасимды – Тайса Абдулла, Мөхәммәтшәрифте Мостафа мулла Сәфәр порукаға алырға яҙыу яҙып, үҙҙәрендә ҡалдырҙылар. Яныш ярлыҡау һорап Өфөгә рапорт бирҙе. Өфө приказы быға таянып, Ырымбур приказына хат яҙҙы, губерна приказы иһә ярлыҡау тураһында шәкерттәргә ярлыҡ һәм өйҙәренә ҡайтарып ебәрергә күрһәтмә бирҙе. Шулай итеп, әлеге биш шәкерт яза-ҡазанан ҡотолдо. Батшаның болала ҡатнашыусыларҙы ярлыҡау тураһындағы указы нигеҙендә эшләнгәндер, моғайын, мөҙҙәтенә тура килеп. Ә бүтән шәриктәштәренә был указ нишләп ҡағылмағандыр – билдәһеҙ. Әллә был бәхетле бишәүҙең туғандары үҙ түрәләренә, бәлки, олораҡтарына ла, алымын-ниен мул тамыҙғандарҙыр – сер булып ҡалды был өлөшләтә ярлыҡау. Әҙ ғәйеплеһенән күберәк ғәйеплеһе, кесеһенән олораҡтары ярлыҡанды. Йәшерәк, быуынһыҙыраҡ алты шәкерттең баштары урмандан Уса, Өфө төрмәләренә, уларынан Петербургтың таш казематтарына барып эләкте, ҡара яҙмышҡыналары ҡасмаҡтан – ҡазаға, ҡазанан язаға ашты.

Нисәмә йылдар төрмә өйрәһе һемергән, ҡат-ҡат допростар, туҡмауязалар, бөткөһөҙ тамуҡ ғазаптары кисергән бәндәләрҙең йөрәктәре генә түгел, ҡаҡ һөйәккә ҡалған тәнкәйҙәре лә яйлап ташҡа әйләнә лә торғандыр – ә ташҡа талау теймәй, – тотҡондар бер заман элекке һүҙҙәренән баш тарта башламаһындармы. Телдәрендә хәҙер ете бәләгә бер яуап: "белмәйем, вә вәссәләм". Кире ҡаҡҡыһыҙ ғәйебен хәтерләтһәләр, уға ла сәбәбе әҙер: "үҙ ихтыярымдан түгел". Өфө канцелярияһында допро-

ста һөйләгән һүҙҙәрен уҡып ишеттерәләр, протоколға ҡуйған ҡултамғаһын күрһәтәләр, быға: “Ни яҙғандарын уҡытмай ҡул ҡуйҙырҙылар”, “үлтерә яҙғансы туҡмап, булмағанды бар тип әйттерҙеләр”, – тип яуаплайҙар. Мостафа ла теге саҡта һөйләгәндәренән баш тартты: “ҡаты ауырый инем, йә туҡмалып иҫтән яҙғанмындыр, бер ни белмәйем, һөйләһәм, һөйләгәндәрем һаташыу ғыналыр”, – тип бара хәҙер. Яуаптарының осо-осҡа ялғанмай, дәлилдәре шикле, һүҙҙәренең ибе, ибәтәйе юҡ. Башта тураһын һөйләп, тәүбәгә килеп, ярлыҡарҙармы, тип өмөт итһәләр, инде һөйләгәндәренән баш тартып, барыһын инҡар итеп, язаларын еңеләйтергә теләйҙәрмелер, белмәҫһең үҙҙәрен. Бер ҡазаға ике яза булмаҫын тоярҙыр, бәлки.

Ләкин, нисек кенә булмаһын, Йәшерен канцелярияның Тикшереү эштәре буйынса 1758 йылдың 24 декабрь приговоры ҡаты ине: Санкт-Петербургтағы Батырша яҡлы тотҡондарға һәр береһенә мәңгелеккә һөргөнгә хөкөм язаһы.

Шул уҡ канцелярия 1758 йылдың 28 декабрендә Адмиралтейство коллегияһына биргән промемория һында быға тәғәйен һуңғы нөктә ҡуйыла: императрица указы буйынса һәм Йәшерен канцелярия приговоры нигеҙендә ун бер бығаулы тотҡондо, йәғни Исмәғил Әпкәйҙе, Дәүләтбай Көҫәғолдо, Ырыҫҡол Исламды, Мирәхмәт Әхмәтте, Ибрай Тимерғазыны, Мөслим Ибраһимды, Әхмәт Көсөктө, Мостафа Хәсәнде, Исхаҡ Мырҙалыны, Сәфәр Йәғәфәрҙе, бунтта ҡатнашҡан ҙур ғәйептәре өсөн, бөтәһенә ҡаты яза бирергә — ҡамсы менән аяуһыҙ һуҡтырырға һәм, танауҙарын киҫеп, Рогервикка мәңгелек эшкә һөрөргә. Ғәйептәре ҙурмы, бәләкәйме, унығына ҡарамай (Батырша болаһына дәхелдәре булғаны өсөн генә лә), ярлыҡау өмөт иткән падишаһтарының хөкөмө ҡалай аяуһыҙ — мәңгелек һөргөн.

Ҡуш башлы, тимер тырнаҡлы яман ҡарағош ҡорбандарын берәмтекләп тә, күмәртәләп тә сүпләй.

## Ғаиләһенең яҙмышы

Төрмәләрҙә ятыр тип кем уйлаған, башына түгел, төшөнә лә асла инмәгән, ни икәнен дә йүнләп белмәгән. Бына ярты йылға яҡын инде Батыршаның ғаиләһе Өфө төрмәһендә ята, бисара Зөлбохар мәғсүмә кәррә ҡәҙәр яҙыҡтары ла юҡ саф сабыйҙары илә. Ир – баш, ҡатын – муйын, ти, ә ата ғәйебендә ни ҡатнаштары бар бәлиғ тә булмаған бала сабыяндарҙың? Тотолғанда имсәк балаһы Сәлихаһына яңы йәш тулып уҙҙы – уға донъяң ни, төрмәң ни. Әле саҡ дүртенә сыҡҡан Зөләйхаһы ғына, иреккә ынтылған ҡошсоҡтай, ҡай ваҡыт үрһәләнеп, үҙәктәрен өҙә әсәһенең, ә аңын-тоңон аңлай башлаған, һигеҙе менән барған Тажетдин инде өйҙәрен, атаһын һағынып борсола. Бәндә ниҙәргә генә түҙмәй икән! Күнегеп киләләр инде бына ғаиләнең төрмәләге тереклеге тигәненә лә.

Үҙҙәрен бер ҡараңғы камераға яптылар. Буйы туғыҙ аршын самаһы, иңе дүрт аршындар тирәһе булыр. Тимер рәшәткәле тәҙрә. Бер мөйөштә ағас һикеһе бар. Уның ҡырында стенаға беркетеп эшләнгән шүрлек

һымаҡ дүрткел ҡалын таҡта – ашау-эсеү урыны. Ишек төбөндә хәжәт өсөн тимер көршәк – камераның бар йыһазы шул. Ишеге ҡалай көрпәүле, уртаһында асмалы-япмалы кескәй ҡапҡасы бар аш-һыу бирмәгә.

Балалары менән шул бер һикегә һыйынышып бергә йоҡлайҙар. Иртән-кис биргән берәр киҫәк икмәген, көрөшкә менән йылы һыуын, төшкөлөккә күберәк кәбеҫтә өйрәһен, боламыҡ кеүек буҡкаһын һикегә һәм әлеге өҫтәл урынындағы таҡта янына ултырып ашайҙар. Ейгән ризыҡтары йән аҫрау өсөн генә. Үҙҙәре ҡояш йөҙө күрмәй, аслы-туҡлы тамаҡланып зәғәферән төҫлө һарғайышып бөтһәләр ҙә, түҙерлек әле, бына төрмәлә тәпәй баҫҡан сабыйына һәм Зөләйхаһына ҡыйын – һөт-аҡ юҡлығы интектерә. Төрмә һаҡсыһы урыҫтарының да әҙәм рәтлеһе була икән: бер олорағы, сабый баланы ҡыҙғанып, йәшергеләп һөт килтергеләне, шул ғына сабыйҙарының әҙерәк йөҙөн асты, арыҡ тәндәренә йән керетте.

Көҙгө аяҙ көндәрҙә арыуыраҡ ине, көндөҙ бер ярты сәғәткә булһа ла төрмә ихатаһына һауаға сығырға рөхсәт иткәндә, балалары уйнаштырып, йүгергеләп ала торғайны. Яуын-һыуыҡтарҙа һалҡын камерала өшөп-бөрөшөп ултырырға мәжбүрҙәр күберәген, тереклек итеүҙәре лә шул берләс һике өҫтөндә лә иҙәндә. Тәпәйҙәре нығынмаған Сәлихаһы тигеҙһеҙ иҙәндә йығылып, битен-башын бәреп, ауыртынып йонсой.

Бар күгенә күнеп, юғын уй-хыялдары менән тултырып, бер ҡотолоп ҡайтырҙарына өмөт итеп көтөрҙәр, ауырлыҡтарына түҙерҙәр ине – түҙмәй нишләһендәр – ҡара көҙ, ҡыш башы һалҡындары ҡапыл тәҡәттәрен алды. Тажетдины һалҡын тейҙереп сирләй башланы. Тәне бер ҡайнар, бер боҙҙай булып, көндәр, оҙон төндәр буйы һаташып ятты. Үҙе ҡаҡ һөйәккә ҡалды, өҙлөкһөҙ йүткерҙе. Бәләкәйҙәре лә ныҡ бирешге. Өҫтәүенә, йән аҫрар ризыҡтары наҡыҫланды, сабыйҙарына бирелә башлаған ярты көрөшкә һөткөнәһе лә туҡталды, үҙенең ҡулына ла бығау һалынды, ҡарауылы көсәйтелде. Ихатаға һауаға сығарыуҙарына хәтле бөтөрөлдө. Ни хикмәт, ни хоҙай шомлоғолор инде. Ҡул-аяҡтары бығаулы, һапһары йөҙлө, ҡураныс ҡына сибек кәүҙәле әсә кешенең бер йәшлек сабыйын бығауына ҡуша ҡуйынына алып ҡосаҡлап ултырғанын, икенсе ҡыҙын эргәһенә һыйындырып йылытырға тырышыуын, эргәһендә ауырып ятҡан ете йәшлек улына тилмереп баҡҡан күҙҙәрен күрһәләр, һаҡсымы-кем әҙәмдә таш йөрәктәре лә еремәй, әҙ генә лә ҡыҙғаныу тойғоһо уянмай ҡалыр инеме икән ни? Төрмәһе шикелле үҙҙәре лә таш бәғерле булмаһаларсы. Ғәйепһеҙ йән, падишаһынан өмөт иткән Зөлбохар, ауырыу, гонаһһыҙ сабыйҙарын һалҡын төрмәләрҙән бер араларҙарына ышанған әсә кеше, үҙе әсә булған падишаһтың ваҡ бала-сағалы, сабыйлы ҡатынды 1756 йылдың 18 ғинуар махсус указы менән ҡулдарын да бығаулатырға, ныҡ һаҡларға, аямаҫҡа кәрәклеген ишетһә әгәр, бар нәмәләрҙән ваз кисер ине, валлаһи. Нисек әле сабыйҙарына ла бығау һалырға бойормаған!

Шул уҡ йылдың февралендә йәнә падишаһ исеменән Ырымбур губерна канцелярияһынан Өфө провинциаль канцелярияһына 8 февраль указы килеп төшә. Унда шулай бойоролған: “Вора Батырши жену Зюлбухарнею Асанову с детьми, двумя дочерьми и одним сыном, по причине известного от мужа ее вора Батырши к бунту возмущения

была с ним, Батыршою, в побеге, и укрывательстве в лесах, где и поймана, отправить в Московскую губернскую канцелярию без наказания".

Указдың айышын үҙе аңламаны һәм аңлатманылар ҙа Зөлбохарға – хөкөммө ул, һөргөнгә йә боласыларҙың ғаиләләрен губерналарға таратып биреүме – ни булһа, шул булыр, урынында күрелер, Мәскәүгә икән Мәскәүгә, төрмә булмаç, бәлки, берәй еңеллеге килер.

Тик бәлә-каза яңғыҙ йөрөмәй, юл аҙабы – гүр ғазабы, нәғез үҙе булды ҡуйҙы Зөлбохар өсөн: ауырыу улы, Тажетдины, ҡышҡы һалҡын юлда сана эсендә өшөп туңып үлде. Бығаулы әсәнең улыҡайының ауырыуынан ҡаты һаташып, һалҡындан туңып, күҙҙәре һүнә барыуын, ҡапыл йылынғандай асырғанып тибенеп асыныуҙарын, әммә үҙенең ярҙам итә алмай, ғажизлығынан ғасабиланыуҙарын мәңге онотаһы, кемделер ҡарғап ҡына үстәре һис ҡанаһы түгел. Атаһы шикелле аҡ йөҙлө, ҡара ҡашлы ғәзиз улҡайы күҙ алдында йән бирһенсе лә әсә йөрәге нисек түҙһенсе.

Атаһының эше, гонаһтары өсөнмө, ғаиләләрендәге тәүге ҡорбан ине ул. Батыршаның берҙән-бер ғәзиз улы. Шәһит киткән балаҡайҙың урынҡайҙары йәннәттә булһын!

Ә алдағы ҡорбанға ҡайһыһы сираттыр...

Конвой начальнигы прапорщик Павел Потапов: "Батыршаның ете йәшлек улы 6 мартта юлда вафат булды", — тип Өфө провинциаль канцелярияһына рапорт ебәрә. Ул һөйөнөстө тиҙерәк еткереүеме, әллә нәүбәттәге үлем хисабы рапорты ғынамы булғандыр, хоҙалар ғына белә.

Ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ тигәндәй, Зөлбохар үҙе юл ғазабын да, улы үлемен, сабыйҙары ыҙаланыуҙарын да тыштан сабыр кисереп, сабый ҡыҙыҡайҙары өшөп туңһалар ҙа, аслыҡтан интекһәләр ҙә, Мәскәүгә үҙ аяҡтары менән баса алды. Ул Потапов тигәндәре юлға тәғәйен наҡыç ризыҡты ла тулы бирҙертмәй, туңған икмәк кисәге, һалҡын һыу менән генә туҡландыртып, юлда яртыһынан күберәк тотҡондары, ир-аттар үлеп ятып ҡалғанда, Зөлбохарҙың ике ҡыҙы менән имен-аман Мәскәүгә барып етеүе аптырарлыҡ та. Мәскәүҙә ризыҡтары булғандыр инде.

Шуныһы мәғлүм: башҡа ҡатын-ҡыҙ тотҡондар шикелле, Зөлбохар ҡыҙҙары менән Мәскәү губерна канцелярияһы ҡарамағына тапшырылғас, Батырша ғаиләһен Б.Ф.Щербачев тигән статский советник үҙенә ала. Унда Зөлбохар йорт хеҙмәтсеһеме, кемдер булып балалары менән йәшәй. Унан шул уҡ 1756 йылдың ноябрь аҙағында, Батырша нәҡ Мәскәүҙә ятҡан саҡтарҙа, Зөлбохар Йәшерен канцелярия тарафынан кире һоратып алдырыла. Канцелярия конторaһына яҡын бер фатирға урынлаштыралар үҙен ҡыҙҙары менән. Бында улар Мәскәү батальонының махсус лейб-гвардия ҡарауылынан бер сержант һағы аçтында тотола. Шул ваҡытта ире Батырша эше буйынса унан өçтәмә һорауҙар алған, яңы тикшеренеүҙәр үткәргән булһалар кәрәк. Ире менән күрештергәндәрме, күҙләштергәндәрме, уныһы мәғлүм түгел. Күрештермәгәндәрҙер, моғайын, был ирле-ҡатынлы кешеләргә шул хәлдәрендә күпме ғазап, тәүбә төçлө тойолмаһын, иң оло бәхет булыр ине. Документтарға ла бындай ваҡиға теркәлмәй ҡалмаç ине, моғайын.

Артабан Зөлбохар статский йортона кире ҡайтыпмы, йәки бүтәндәр тарафынан алыныпмы йорт хеҙмәтсеһе йә кемдер булып балаларын бергә

аҫрап торғандыр, хәҙер асыҡ ҡына билдәле түгел, әммә улар оҙаҡ йылдар Мәскәүҙә йәшәй. Рухи ҡорбанлыҡҡа ла дусар иттеләр үҙҙәрен. Төрмәнән сығарырға, ирек бирергә вәғәҙә итеп, христиан диненә күсергә күндерҙеләр. Шул уҡ 1756 йылдың аҙағында ике ҡыҙын да – Зөләйха менән Сәлиханы – суҡындырып, христиан диненә күсерәләр. Зөләйха – Наталья, Сәлиха – Вера исемле урыҫ ҡыҙҙары булып китә. Әммә Зөләйха-Наталья, мосолман ҡыҙы булып тыуып, православныйға әйләнеп оҙаҡ йәшәмәй. 1759 йылдың ғинуарында ниндәйҙер ауырыуҙан үлеп ҡуя. Зөлбохар ҙа христиан диненә күсерелеп, Мария булып китә.

Быға аҙаҡ Сенат начальнигы һуңғы нөктәне ҡуйҙы.

"Хөрмәтле обер-секретарь, – тине ул. – Ул, кемде... Мария Александровнаны ҡыҙы менән хәҙер уҡ Йәшерен канцелярия ҡарамағына алып, Синод менән һөйләшербеҙ, монастырға ебәрергә кәрәк үҙҙәрен".

Был һүҙҙәр ҡайталай хәл итмәҫлек ҡәтғи ҡарар хөкөмөндә ине. 1763 йылдың июлендә Йәшерен канцелярия обер-секретары Михайло Хрущев Мария Александровнаны ҡыҙы Вера менән икеһен монастырға ебәреү тураһында Синодҡа хат яҙыр, Сенат ҡарарын үтәшер. Алты йыл элек Батыршаға батшаға яҙған хатын олуғ адресатының үҙ ҡулына тапшырырға ант иткән Михайло Хрущев инде килеп ҡатынына ла вәғәҙә биреп үтәмәүе, хатта ки киреһен эшләүе ниндәй ҡағиҙәгә инәлер ҙә, ниндәй язаға хаҡлылыр.

1763 йылдың 18 сентябрь көнө Сенат указы менән Мария Александровна яҙмышына бәйле һуңғы ҡаты ҡарар сығарыла. Унда шундай юлдар бар: "По указу ея императорского величества правительствующий Сенат по ведению оной конторы о посланной известного вора и возмутителя башкирцев Батырши жене, воспринявшей веру греческого исповедания Марьи Александровны, дочери и с малолетнею дочерью Верой, в имеющейся в Москве Ново-девичий монастырь, где велено быть ей под присмотром, производя ей и с дочерью пищу против одной монахини, приказали оной Марии и с дочерью ее в рассуждении того, дабы оне каким-либо образом на прежнее свое жилище возвратитца не могли, где б иногда живущим тамо не нанесли какова сумнения, или б же попрежнему в магометанский закон не обратились, быть в помянутом монастыре под присмотром".

Ҡалай ҡурҡыныслы тойола һаман Рәсәй хөкүмәт сенатына үҙ илдәренән алыҫ ике бөртөк ҡатын-ҡыҙ заты ғына ла. Шулай Зөлбохар-Мария туғыҙ йәшлек кесе ҡыҙы Сәлиха-Вера менән икеһе, сәстәре ҡырҡтырылып, монашкалар итеп, шау ҡаранан кейендерелеп, монастырға ябыла. Имам хатип Батыршаның ҡатыны оҫтабикә Зөлбохар, мосолманлығын ташлаттырылып, христиан диненә күсерелә, монастырь эсенә инеп юғала.

Әй әҙәм яҙмышҡыналары, ислам динен яҡлап дау ҡубарған, шул дин өсөн йәнен фиҙа ҡылыр Батырша мулланың хәләл ефете менән ғәзиз ҡыҙы мәхдүмә суҡындырылып, үҙ диндәренән яҙһындарсы ла, иманынан, теленән, иленән мәхрүм иттерелһендәрсе!..

Был Батырша ғаиләһенең ҡорбандары ғына түгел, бөтә ҡәүем, ил-йорт фажиғәһе лә ине.

## Ил өҫтөнә төшкән ҡаза һәм язалау

Ауыр дәүер килде башҡорт иленә.

Боланан һуң ҡазаһы, ҡаза артынса язаһы башланды.

Гәйнә иләүендә бола ныҡлап ҡабынып китә алмай, ҡапыл үҙ эсендә баҫтырылғас, хөкүмәт ғәскәр килтереп ҡандар түгеүгәсә, карателдәр менән ҡырҙырыуғаса етмәгәс, ҡаза-касафаты аҙыраҡ ҡағылды, ахыры. Башлап йөрөүселәрен, ҡоралға тотонған бер төркөмөн ҡулға алыу, тикшереү, хөкөм сығарыуҙар менән сикләнделәр. Бик аҙҙарына ғына ҡаты яза бирелде, ҡатнашҡандарҙың күбеһе ярлыҡау тапты. Батырша-ның боласы яраны йә шәкерте тигәндәренә иһә аяу ҙа, шәфҡәт тә юҡ ине. Уларҙың ҡасҡан береһен берәм-берәм тота торҙолар, имамдары эләккәнсе туҡмап-ыҙалап төрмәләрҙә тота бирҙеләр. Ҡасҡындан – тотҡонға, тотҡондан – язаға.

Гәйнә күтәрелешен башлап йөрөгән дүрт башҡортто – Сурағол Миңлебайҙы, Аҡбаш Әбдүште, Боҫҡон Йортбағошто, Һөйәрғол Имән-ғолдо – яҡынға, Уса төрмәһенә яптылар.

Ҡарсығаны – ябалаҡ, ябалаҡты ҡоҙғон алған заман. Был уҙамандар өҫтөнә ғәйепте күп өйҙөләр булһа кәрәк. Гәрсә барыһы ла ғәләм күҙ алдында эшләнде, йәшермәк-танмаҡта артыҡ фәтеүә юҡ ине. Ыҙа-яфа-ларға түҙмәй халыҡты күтәрергә, халыҡты яҡларға тип дау ҡубарған-дар, яуыз старшиналарына ҡаршы аяҡланғандар икән, ғәйептәрен күтәрергә әҙерҙәр. Ғәуам түгел, улар ғына ғәйепле. Әптүк Ҡужағол яуыз үлте-релһә, үлтереүсеһе Мостай үҙ йәне менән ҡарыуын алған. Бүтәнсә ҡан ҡойолмаған. Иләү туҙылмаған.

Айырыуса Батыршаның иң яҡын яраны, уң ҡулы Сурағол мулла Миңлебайға ныҡ ҡаныҡтылар. Имамы менән бәйләнештә әллә низәр таптырып, юҡ серҙәрҙе систермәк булып, яман ыҙаланылар, туҡманы-лар, иҙҙеләр. Булмағанды "булды" тип, уйҙа ла юҡты "шулай" тип, башына тағы ҙурыраҡ ҡаза алырғамы ни? "Әйтеләһе әйтелде, булма-ғаны – юҡ", тип тешек торҙо Сурағол.

Килһә килә икән — тәфтишселәре башҡорттан татарға, татарҙан урыҫҡа әйләнгән суҡынмыш керәшен булып сыҡты. Үҙе күптән динен дә, телен дә онотҡан бер маңҡорт. Яһилдың да яһилы, ҡанһыҙҙың да ҡанһыҙы тағы. Йән тартмаһа, әҙ генә ҡан тартһасы. "Батырша ҡайһы мосолман даирәһенә китергә ниәтләй ине, әйт!" – тип тылҡый-ҡыйнай йәнен ҡыйҙы.

Бер заман – февраль урталары булһа кәрәк – әллә тиҫкәреһе әйләнеп, әллә төшөрөп килеп, Сурағолдо һушын алғансы ҡамсы менән ярҙыр-ҙы, үсе ҡанмай аҙаҡ үҙе тотондо:

— Ҡәбәхәт, быныһы шул вор муллаң өсөн! – тип яман һалып ебәрҙе. Танау-ауыҙынан шөбөрләп ҡаны аҡҡан Сурағол кире тороп баҫыуына, суҡмарҙай йоҙроғо менән битенә икенсе тапҡыр тондорҙо.

— Быныһы динең өсөн, басурман!

Теҙ сүкмәҫкә, тора алмай ятмаҫҡа, нисек тә аяҡ өҫтө ҡалырға кәрәк ине Сурағолға. Яттың – бөттөң. Көс-хәл менән тағы баҫты ул. Өсөнсө таш йоҙроҡ йәнә килеп ҡунды, күҙ алды ҡып-ҡыҙыл ут булды:

— Бынныһы эт-бүре тоҡомоң өсөн, эт йән!..

Сураҡол тағы торорға ҡалҡынғайны, йән еренә һиңкетә типтеләр – бөгөлдө төштө, иҫ-аңын юғалта барғанын тойҙо, эсе-башы ниҙәндер туҡылданы: туңк-туңк... һеңк-һеңк... Уны шунда бөйөр-талаҡтарын иҙгәнсе, баш-күҙҙәрен ҡан-күк иткәнсе типкеләнеләр, ит-талҡанға әйләндерҙеләр. Шунан ике тәүлекме һушына килмәй, Сураҡол тыш кеүек һалҡын камераһында йән бирҙе.

Императрица Елизавета Петровна мәғрифәтле Европа илдәре алдында үҙен мәрхәмәтле, Рәсәйҙе мәҙәниәтле гуманистик ил итеп күрһәтмәксе булып, үлем язаһын рәсми бөтөргәйне шул замандарҙа. Эйе, батша һүҙендә, декларацияларында үлем язаһы юҡ, уның ҡарауы ғәмәлдә бар. Империяла үлем ҡазаһы менән ҡаплатылған ҡара хөкөм һөрә ине һаман. Йәнәһе, баш күтәргән башҡорттар ҙа, ана, үлем язаһына тарттырылмай, иң ҡаты яза тигәне – һөргөн менән сикләнә. Еңелсә тән язаһы бар. Үлгәндәре бар икән – ауырыу-үлтереү ҡазаға япһарыла ҡуйыла.

Гәйнә уҙамандарынан Батыршаның таянысы Сураҡол мулла Миңлебай шулай Уса төрмәһендә туҡмалып үлтерелһә, төрмәләштәре Аҡбаш Әбдүш, Боҫҡон Йортбағош, Һөйәрғол Имәнғол, тағы Сәғит Субар, Күсем Мәхәтәй Сенаттың 1756 йылғы указы буйынса бик ҡаты ҡамсы менән һуҡтырылып язаланғандан һуң Рогервикҡа мәңгелек һөргөнгә хөкөм ителгәйнеләр. Ләкин улары, сирек юлды ла үтә алмайынса, ҡышҡы һыуыҡта туңып, аслыҡтан ҡырҡылып, юлда үлеп ҡалалар. Нәүбәттәгеләрен йәнә яза – үлем көтә.

Ихтилалда көньяҡ Уралдағы төп усаҡтары көҙгә һүндерелгәс, Ағиҙел үре, Һаҡмар, Яйыҡ, Эйек буйҙарында башлана ла инде башҡорт халҡының иң эре ырыуҙары өҫтөнә – бөрйәндәр, ҡыпсаҡтар, үҫәргәндәр, тамъяндар, ҡатайҙар, юрматылар иләүҙәренә – иле менән бергә төшкән иҫ киткес бәлә-ҡазалары һәм ҡырғындары. Былар башҡорт ил-йорт башына төшкән, Рәсәй дәүләтенең ҡарары менән башҡарылған, аслығы, һыуығы менән килгән махсус үләте ине. Баш бирмәҫ башҡортто тамырынан ҡырыу, геноцид.

Сенат батша исеменән 1755 йылдың 14 сентябрь указы менән Ырымбур губернаһына Неплюевтың юллауы буйынса, ҡәтғи бойороҡ төшөрә: ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттарҙы тотоп хөкөм итергә һәм танауҙарын ҡырҡып, ҡамсы менән язалап, Рогервикка мәңгелек һөргөнгә һөрөргә (ҡалай еңел яза!). Хәрби хеҙмәткә ярашлы йәштәрен, ҡамсы менән һуҡтырып, гарнизон полктарына һалдатлыҡҡа, 12 менән 18 йәш араһындағы үҫмерҙәрен флотҡа матрослыҡҡа 25 йылға олаҡтырырға. 12 йәштән түбән балаларҙы әсәләре менән конвой аҫтында Мәскәү губерна канцелярияһы ҡарамағына ебәрергә һәм фабрика эштәренә, бүтән эштәргә бүлергә, етем ҡалған әсәһеҙ балаларын губернала алырға теләгән кешеләргә таратып бирергә һәм ғүмерлеккә крепостной хәлендә эшләтергә; балаларын һәм ҡатын-ҡыҙҙарын суҡындырырға. Был инде башҡорттоң күп өлөшөн ҡырға һөрөп, үҙәк Рәсәйгә таратып, суҡындырып, иленән, теленән, диненән яҙҙырырға һәм йотторол юҡҡа сығарырға тигән һүҙ. Уларҙы конвой менән ҡыуыр өсөн йәйәүле пехота, драгун, ландмилиция полктары бүленә.

Беренсе конвой октябрь айында ойошторола (ҡалай тиҙҙәр, етеҙҙәр). Уға Ырымбурҙа төрмәләрҙә ятҡан ике йөҙ ун өс тотҡон башҡорт ингән. Ирҙәр, ҡатындар балалар — барыһы бергә. Араларында ихтилал үҙәгендә булған һәм язалап Рогервик һөрөлөр утыҙ бер башҡорт ил азаматы, утыҙ икеһе — ҡамсы менән һуҡтырылып, егерме биш йылға гарнизон полктарына һалдатлыҡҡа олаҡтырылырҙары. Былай, язаһыҙ һалдатлыҡҡа, матрослыҡҡа тәғәйендәре ун һигеҙ егет. Иң күбе — йөҙ ун биш йән — губерналарға таратылыр ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар. Ҡырҡ ылаулы, ҡалғандары йәйәүле конвой, Оло каруандай булып һуҙылып, 16 октябрҙә, инде ҡара һыуыҡтар башланғас, Ырымбурҙан Мәскәү ҡарай юл сыға. Уны ҡарауыллап, Ярославль пехота прапорщигы Коробин командалығында алтмыш өс һалдат оҙата бара. Уларға әле крепостар араһында һәр прогон һайын тағы ун һыбайлы, ике йәйәүле һалдат ҡушылырға тейеш. Тимәк, тотҡондарҙың яртыһы тиклеме һаҡсы.

...Инде өсөнсө аҙна юлдалар. Алдағы ылауҙарҙа ваҡ балалар, атлай алмаҫ ауырыу тотҡондар. Арттағыларында шулай уҡ бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын һәм һалдаттар. Ике уртала йәйәүлеләр — бығаулы тотҡондар. Бығаулы аяҡ менән күпме атларға мөмкин. Көнөнә 20-25 саҡырымдан да ары әллә ни алдыра алмайҙар. Кискәсә ауыр бығауҙарҙы һөйрәп, аяҡтары өйкәлеп, ныҡлы тигән ирҙәр ҙә тамам хәлдән таялар. Тейешле бер киҫәк ләс икмәген, йылы һыуын йүнле бирмәүҙәре, аслығы миктәтә. Ноябрь айында ҡара һыуыҡтар башланып, өҫтәрендә йүнле йылы кейем булмаған бисә-сәсә, бала-сағалар өшөп ауырып, һыуыҡтан туңып, юлда унарлап-унарлап ҡырылып ҡалалар.

Тәүге конвойҙа оло әсәләр, өләсәләр, ҡыҙҙар, улдар. Етемәктәр барыһы йөҙ ҙә ун биш йән — асығып йә туңып юлда үлеп бөтә. Ошо тәүге конвойҙа Ырымбурҙан оҙатылған ике йөҙ ун өс кешенән Мәскәүгә ни бары ун һигеҙ йән барып етә. Ике йөҙ ун өстән бары ун һигеҙ йән! Шуларҙың ун дүрте Ырымбурҙың үҙендә үк, юлда: октябрҙә — егерме һигеҙе, ноябрҙә — илле өсө, декабрҙә ун алтыһы һәләк була.

Боланан һуң килгән яман бәлә, фәләкәт артынан ойошторолған һәләкәт был. Хөкүмәт тарафынан эшләнгән махсус ҡырғынлыҡ. Башҡортто ҡырып бөтөрөүгә йүнәлтелгән вәхшилек.

Рәсәйҙә үлем язаһы юҡ, имеш, булһа, үлем ҡазаһы ғына бар. Төрмәлә, юлда нисек үлгәндәренә хөкүмәт ғәйепле түгел, йәнәһе. Мәскәүгә шулай өс айлыҡ ҡышҡы юлды ас-яланғас үтеп, ер өҫтөндәге тамуҡты кисеп, иҫән барып юлыҡҡан ир-ат бары биш бөртөк кенә — һикһән бер ирҙән биш йән! Бына ул иҫәндәр:

Ҡотлоюл Ҡолторсаҡ, 60 йәш;
Уҫтыҡ Ғайса, 30 йәш;
Арыҫлан Ураҙлы, 44 йәш;
Ырыҫҡол Ҡотломбәт, 50 йәш;
Атанғол Туған, 46 йәш.

Башҡорт яуҙарының утын-һыуын кискән, аҙаҡ ҡаза-яза тамуҡтарын үткән биш ир Мәскәүҙән Балтик буйына нисек барып еткән, күпме ғүмерлек һөргөндө күтәрә алған, әлегә нәмәғлүмдер. Яманатлы Рогервикҡа тәүгеләрҙән аяҡ баҫыр һөргөнсө башҡорттар. Кем белә, Сала-

уат Юлаев, Юлай Аҙналин, бүтән пугачевсылар килгәндә уларҙың иҫәндәре лә булғандыр. Бәлки, күрешә лә алғандарҙыр яугир ирҙәр.

Шунышы йәнә ғәжәп, беренсе конвойҙан әлеге Йәшерен экспедиция исемлегендә ни тереләр, ни үлеләр исемлегенә инмәгәндәр бар. Күрәһең, улары юлда туңып үлеп, күмелмәй ятып ҡалған ғәйеп йәндер. Мәғлүм булыуынса, байтағы юлда конвойҙар тарафынан туҡмап үлтерелгән һәм шул көйө ташлап кителгән. Ырымбурҙан иһә ике йөҙ утыҙ тотҡондан бары ҡырҡ бише иҫән ҡала. Өсөнсөһөнән, дүртенсеһенән тағы шул сама.

Башҡорт тотҡондары шулай конвой артынан конвой юлда ҡазалы үлемгә, күрәләтә ҡырылыуға һөрөлә.

Рәсәйҙә "үлем язаһы юҡ". Үлем ҡазаһы бар икән, хоҙай эше.

Ҡазанан — язаға, язанан — һәләкәткә.

Бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, тамъян, ҡатай, юрматы башҡорттары 1755 йылдың көҙөндә һәм ҡышында шулай ҡырыла. Ырымбур менән Мәскәү юлы araһы үлек башҡорт кәүҙәләре менән түшәлә. Ул ике мең саҡырым юл башҡорт һөйәктәренән түшәлгән үлем тракты тарихыбыҙ өсөн. Нишләмәк кәрәк, тарихты кире һөрөп булмай, Рәсәй үҙе кеше мәйеттәре өҫтөндә, шул иҫәптән йөҙәр меңләгән башҡорт баштары өҫтөндә ҡоролған бер дәүләт.

1755 йылғы башҡорт ихтилалының аҙағындағы ҡазаһы һәм язаһы дәүләт күләмендә үс алыр шундай ҡанлы мәхшәр менән ослана. Ослана, ләкин тамамланмай әле.

## Шлиссельбург тотҡоно

Хөкөм эше — көтөм эше. Батырша Мәскәүҙән Санкт-Петербургка килтерелеп, Йәшерен канцелярия төрмәһенә ябылғас, хөкөм сығарырға бигүк ашыҡманылар. Башта яран-шәкерттәре эшен тикшереү, батшаға яҙған ғаризнамәһе буйынса килтерелгән мәғлүмәттәрҙе тәхҡиҡләү[3], губерна аша аныҡлатыу менән шөғөлләнделәр булһа кәрәк. Төрмәлә ятыуына ярты йыл тигәндә генә тикшереү-тәхҡиҡ эштәрен саҡ яңыртып ебәрҙеләр. Һорау-төпсөнөүҙәренән күренеп тора: допрос ғаризнамәлә күрһәтелгән факттар, исемдәр буйынса бара.

Тәфтишсе урта йәштәрҙәге зыялы һәм ғилемле генә ипле кеше күренде, йомшаҡ һөйләште, үҙен тыныс тотто.

— Урал аръяғы башҡорттарына, һалйыҒуттарға барғас, мәжлестә ниҙәр һөйләнең фетнәгә ҡотортоп, мәжлестәгеләр һиңә ни һөйләне? Хәтерләп әйт әле шуларҙы.

— Һалйығут вәләйәтенә барған ваҡытымда фетнә ҡубармаҡ хаҡында һис ни һөйләмәнем. Улар миңә лә һөйләмәне. Ниҙәр әйткәндәр — шул яҙылған. — Шулай ҡырт киҫеп инҡар менән яуапланы Батырша.

— Ярай. Мөслим ауылында Мансур есаул менән ни һөйләштегеҙ? Үҙең ни ҡотҡо һалдың?

— Алар ғаризнамәлә яҙылған. Артығын белмәйем. Бүтән һүҙ булманы. Мансурҙың зарланып әйткәндәренә яуап бирҙем: гонаһыбыҙ шомлоғо

[3]Тәхҡиҡләү — өҫтәмә тикшереү.

вә заманының ахырылыр был, тип. Яҙыуымда зекер ителгән һүҙҙәрҙе Мөслим старшинаның үҙенән ишеттем.

— Инде Ғабсаттар мулла менән һөйләшкәнеңде хәтереңә төшөр әле.

— Дин хаҡында ғына гәпләштек. Ғабсаттар мулла минән аҙаҡта һораны: “Вәлиниғмәт, үҙегеҙ ни һиммәттә тораһығыҙ?” — тип. Мин әйттем: Хаҡ юлында йәнем фиҙа тип, Ҡөрьән һүҙе илә. Мосолмандарығыҙ ни һөйләйҙәр, тыңлай йөрөгөҙ, тинем. Әгәр ки вә хәлдәр аңланһа, иншалла, Аллаһы тәғәлә, беҙҙәр вә ислам хаҡында һиммәт итмәккә шәрүғ итмәгә ҡатланырбыҙ, тинем. Былар һәр гиз мосолман тәғбирҙәрелер.

— “Хәбәрҙәр вә хәлдәр аңламаға ҡатланырбыҙ” тигәнеңде төшөндөрөп бир әле, ни ул?

— Хәбәрҙәр вә хәлдәр аңламаға ҡатланығыҙ тигәндең вәжәһе[4] вә мәғәнәһе шулдыр: динебеҙҙең хараплығына ҡәсед иткән залимдарҙан үсебеҙҙе алырға вә уларҙы золомлоҡтан тыйып ҡалырға, динебеҙҙе әхнә вә әғлә[5] итергә һиммәт итмәктер.

Тәфтишсе ғаризнамә буйынса ниҙер асыҡламаҡ булып, һорауҙар биреп ҡарай, хәйләкәр Батырша яҙғанынан артығына һис ары китмәйсә, шуға һылтана, өҫтәүенә, үҙен хаҡ мосолман күрһәтеп, бар һүҙен дин бөркәнсеге менән ҡаплап ҡуя.

— Барыһын дингә ҡайтарып, яуаптан янтайма, — ти быны аңлап торған тәфтишсе һәм тағы тәғәйен һорауына ҡайта. — Әйт әле тураһын, хаҡты һөйләр мосолман булһаң, халыҡты бунт сығармаға саҡырыр мөрәжәғәтеңдең төп маҡсатын.

— Динебеҙҙең хаҡлығын һаҡлап, исламды ҡурсалап, иман-динебеҙгә хараплыҡ килерен күреп, ғаризнамә яҙмаҡ булдым, уны вәжип бурысым һананым. Вәжип эш беҙҙең динебеҙҙә гонаһ түгел, оло сауап.

— Уны ҡасан яҙҙың һәм нисә дана тараттың? Ҡайҙарға?

— Өгөтләмәк вә ҡыҙҙырмаҡ яҙыуымды 1755 сәнәлә, хәмәл айының нисәһендәлер яҙмаҡҡа шәрүғ әйләнем. Йәй көнөндә тамам ҡылдым. И, алла, ядымдан яҙлыҡты, өсмөләр, дүртмелер дана күсерҙем. Ул күсеректең береһен мулла Исмәғил илә Гәйнәгә ебәрҙем. Икеһеме, өсөмөләр йортомда ҡалды – келәттә. Үҙемдең был ғәмәлемде золомлоҡҡа хәмәл итмәймен, бәлкем, дин хаҡына һиммәт итмәккә хәмәл әйләнем.

— Тағы бер һорау. Бөрйәндәр завод башлығына зарландылар, тип яҙаһың ғаризнамәңдә. Кем ул завод башлығы? Мырҙа менән генерал кем? Исемдәре? Бөрйәндәр менән йәнә ни һөйләштегеҙ?

— Уны, ул забудсыны, исеме илә әйткәндәр ине, хәтеремдән сыҡҡан. Бәс, ул үлтерелгән яуыз мәғлүмдер ис. Ауыр хәлдәренә сыҙамай, башҡорттар мырҙа илә янаралға барғандар. Мырҙаһы – Ҡотломөхәммәт, янаралы губернатор Иван Иванычтыр. Бөрйәндәр илә ғаризнамәмдә яҙылғанса һүҙләштек. Фетнә-фәлән ҡубармаҡ хаҡында һүҙ булманы.

Тәфтишсе, аптырағас, асыуланып ҡаты һорай башлай:

---

[4]Вәжә — айыш, эстәлек.

[5]Әхнә вә әғлә — нығытмаҡ һәм күтәрмәк.

— Бел, яуаптан ситләшһәң, хөкөмөңә өҫтәмә килерен! Тағы бер һорау. Һуңғыһы. Гәйнәгә ебәрергә йыйынған Йософ мулла менән ниҙәр ҡылмаға кәңәштегеҙ? Йәшермә, тураһын әйт!

— Барыһын, тураһын әйтәм ис. Мулла Йософты Гәйнәгә ни өсөн ебәреү ғаризнамәмдә бәян әйләгән инем. Йәғни уға әйттем: яҡшы аттарға менеп, Гәйнәгә барығыҙ. Әүәл Исхаҡ муллаға юлығығыҙ. Анан һуң уның илә Гәйнә кешеләрен вә һәм ул тарафтағы халайыҡтарҙы атландырып алып килегеҙ бында, беҙҙең хозурыбыҙға, тинем. Андан һуң сығырбыҙ Себер юлына, Әй буйына вә һәм ғәйреләргә ҡушылырбыҙ, барса мосолмандарыбыҙға, тинем. Яфалар күргәҙгән залимдарға, динебеҙҙе ҡыҫҡан, мосолмандарҙы суҡындырғандарға ҡәседләнәйек, тип кәңәшләштек. Әммә ләкин падишаһымыҙға, дәүләтемеҙгә ҡаршы һүҙ булманы. Шуны иҡрар иттек, мөхтәрәм мөхтәҡҡәҡ, үс-ҡәседебеҙ падишаһымыҙ ғәзими хәҙрәттәренә, олуғ илебеҙгә ҡаршы түгел, аларҙы Хоҙайыбыҙ һаҡлаһын, фәкәт яуыз түрәләргә, золомға ҡаршы. Биллаһи ғәзим.

Батырша ғүмер буйы йөрөгән үс-асыуын, күңелдәген асып һала кеүек ине. Ләкин һаман үҙ туҡһаны туҡһан, ҡылғандарын оло ғәйепкә һанамай, үҙен енәйәтсе тип танымай.

— Ғәйепһеҙ һанағас, ниңә һуң ҡасып киттең? Кемдәрҙән ҡастың? — тип аптырап һорай тәфтишсе.

— 1755 сәнә көҙ фасылында төнөн ауылыбыҙға күп кешеләр йыйылды, ҡораллылары, ҡоралһыҙҙары илә. Миңә ебәргән хат буйынса ғоман әйләнем, шәйет, мине үлтермәгә ҡәсд итәләрҙер, тип. Бәс, шул сәбәптән башымды ҡотҡарырға йәһәт иттем. Әммә миңә һәләклек ҡәсде ҡылған кешене белмәнем. Аның өсөн, кем дошманлыҡ итеп мине атыр йә сәнсер кеше, дуҫлыҡ итеп минең ҡатыма килгән кеше лә булманы.

— Дошманым да, дуҫым да юҡ икән, тимәксеһең инде. Ә үҙең ҡасҡанһың. Бер үҙең генә түгел, ғаиләң, шәкерттәрең менән бер вор өйөрө булып. — Тәфтишсе быны мыҫҡыллы тон менән әйтте.

Һорау алыу аҙналар һуҙылды, бер үк һорауҙарға ҡайсаҡ ҡат-ҡат ҡайттылар, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр килтерҙеләр, хатта туҡмап, язалап ҡаранылар, ә Батырша бер үк тәғбирҙәрен ҡабатланы: падишаһымыҙға, олуғ дәүләтебеҙгә ҡаршы фетнәгә һис кемде ҡотортманым, динебеҙ һиммәте өсөн залимдарға ҡәседем иғлан ҡылдым. Динебеҙ хаҡына йәнем фиҙа, падишаһымыҙ ярлыҡамаһа, Аллам ярлыҡар, собхана шаһит.

Берәүҙең үҙе батыр, берәүҙең һүҙе батыр, ти – шуның икенсеһен таныҡлай Батырша һаман. Һүҙе менән көрәшә, һүҙе менән көслө. Үҙен генә түгел, динен, диндәштәрен яҡлай ул.

Батырша яҙған ғаризнамәһендә — күп серҙәрен әйтеп биргән яҙмаһында ла әле бар серҙәрен асып бөтмәй. Унда ла хәйлә әмәлен таба: һуңғы биттәре алдынан ярты биттән артығыраҡ буш урын ҡалдыра, йәнәһе, ҡалған серҙәрен өҫтәйһе урын. Йәшерен канцелярияның тикшереү эштәре бүлеге түрәләре, мәкерле, хәйләле эштәрҙә йышылған начальниктар Батырша ҡармағына ҡаба яҙа. Ниндәй серҙәре ҡалған, уларын нисек астырырға, тип баш вата. Батырша ҡурҡытылып, язалатылып ҡына һындырылыр һын түгел. Һаман бер һүҙҙе ҡабатлай: мине

падишаһ хәҙрәттәре менән көрештерегеҙ, серемде фәҡәт уға ғына сисәм. Вәссәләм.

Батырша батша ярандарының иң яҡындарына, Йәшерен канцелярия начальнигы, генерал-аншеф, төрлө ордендар кавалеры, атаҡлы графтың үҙенә – Александр Иванович Шуваловҡа хат менән мөрәжәғәт итә. Үҙенең иң яуыз дәүләт енәйәтсеһе икәнен белеп, төрмәһендә шым ғына ятһасы, бөтә Йәшерен канцелярия чиновниктарын, төрмә начальниктарын дер һелкетеп торған графтың асыуына тейеп, башынан яҙып уҡ ҡалаһын уйлаһасы.

Графты ололап, үҙен — фәҡир тотҡонон кеселәп-кеселекләп теҙгән ул үтенес һүҙҙәрен: “Олуғ ғиззәтле-ғәзими, әғлә дәрәжәле графҡа, падишаһымыҙҙың шанлы вә мәрхәмәтле вәзиренә, дәүләтемеҙ хазинаһының хужаһы вә шәфҡәт эйәһенә кеселекле үтенес вә ялуарыу илә тамуғ төбөнә ташланған ҡолоңдан.

Беҙ нисәмә мәртәбә һүҙ вә хат илә падишаһымыҙ ғәзими хәҙрәттәренә шәхсән үҙ хозурына еткерелер үтенестәр илә мөрәжәғәттәр ҡылғайныҡ. Шул көндәрҙән хәҙергәсә ошо үтенестәребеҙҙең үтәлерен олуғ өмөттәр илә көтә ҡалғайныҡ. Вә ләкин көткәнебеҙ әлегәсә юҡ та юҡ. Фәҡир ҡолоңа нәмәғлүмдер кисектереү сәбәптәре.

Үтенеп һораймын һеҙҙәрҙән, бер ваҡытын табып, фәҡирегеҙҙең үтенестәрен үтәргә, йәғни һүҙҙәремде падишаһымыҙ хәҙрәттәренә еткерергә. 1757 сәнә, май айы”.

Бәләһенән баш аяҡ, еткерергә мәжбүр төрмә начальнигы хатын оло начальнигына, генерал-аншефтың үҙенә. Ни ғәжәп, булмаған тиерлек хәл — граф Шувалов колодникты кабинетына саҡырта.

Батырша Йәшерен канцелярияның дәһшәтле начальнигы алдына баҫа. Береһе — атаҡлы дәүләт эшмәкәре, икенсеһе – дәүләт енәйәтсеһе, береһе — илде, түрәләрҙе дер һелкетер батша яраны, икенсеһе — ил ҡоло, бығаулы тотҡон. Генерал эполеттары менән ялтырап, аҡһыл париктары менән ҡабарып, мөһабәт ҡиәфәтле, уҫал ҡарап ултырған граф алдында сәсе, мыйығы етек, өҫ-башы өтөк, аласа төрмә кейемле бығаулы ҡарт енәйәтсенең мөштөм баҫып тороуы арыҫлан менән бесәй торошон хәтерләтә ине.

— Йә, олуғ вор, хәтәр енәйәтсе, императрицаға әйтер ниндәй серҙәрең бар икән, әйтеп һал хәҙер үк ҡаршымда, йәнең менән хушлашмайым тиһәң! — Граф һүҙе түгел, Йәшерен канцелярия начальнигының ҡаты һүҙе ине был. Уны эргәләрендә торған тылмас, Сит ил эштәре коллегияһы секретары Александр Турчанинов түкмәй-сәсмәй тәржемә итеп бирҙе төркигә. Батырша тыныс ҡабул иткән кеүек булды.

— Йәнем менән хушлашҡансы, ул серҙәремде падишаһымыҙ ғәзими хәҙрәттәренә үҙ ауыҙымдан еткермәгем хәйерле, олуғ граф. — Меҫкен бесәй тауышына оҡшамағайны тотҡон әйткәне. Урыҫсаға ауҙарылды – начальник мыйығының бер төгө ҡыбырҙаһасы.

— Бел, хәшәрәт, бәндә аҡтығы, заводымдың һәр ташы өсөн ете ҡат тиреңде тунатырмын хәҙер, башыңды мәңге ыҙалай казематта серетермен. Хәҙер үк сер тигәндәреңде, ҡолаҡҡа яғырҙай булһа, ҡарарбыҙ. Йә ошонда уҡ телеңде киҫтереп алам, ике күҙеңде соҡотоп

сығартам! Һайла! Икеһенең берен. — Шуваловтың ҡот осмалы был һүҙҙәре йәнә тәржемә ҡылынды.

Генерал-аншеф ым менән генә ишара яһағайны, ишектә ҡара мундирлы өс уҫлаптай ир пәйҙә булды. Береһен таныны Батырша — үҙен һуштан яҙҙырғансы язалаған ҡанһыҙ йәлләт. Шувалов ҡушһа, күҙен дә йоммай күҙ алдарында телен дә киҫеп, ике күҙен дә соҡоп аласаҡ был армай. Тәндәре сымбырлап-сымырғанып, күҙ алдары ҡараңғыланып киткәндәй итте хатта.

— Йә, һайланыңмы? Һүҙеңме, әллә телең менән күҙеңме? – Тимер сың сыға ине бысаҡһыҙ һуйыр түрә тауышынан. Һүҙен һүҙ итмәҫ тимә. Тауышынан, ҡылығынан уҡ һүҙен дә тәржемәһеҙ аңлап тора ине Батырша. Кинәт шомло тынлыҡ уратты бүлмәне. Барыһы ла тотҡондоң ауыҙына ҡарап ҡатҡайны, ахырыһы.

— Әғлә дәрәжәле графтың һүҙенә ышанам. Падишаһымыҙға әйтер серемде уның иң яҡын яранына асырға разыймын, — шулай ике яҡлы мәғәнә һалып башланы һүҙен. — Вә ләкин шартым шул: ғаризнамәмдең аҙаҡҡы биттәре үҙемдә ҡалған буш урынына яҙып тултырып бирәйем. Йәнә олуғ түрәнең үҙенә генә әйтер изге үтенесем бар өҫтәргә.

Енәйәтсенең ниҙәр һайлар һүҙен тәржемәсе ауыҙынан һурып алырҙай булып көттөләр. Ишеткәс, аптырай ҡалдылар: һаман сер өҫтөнә сер, ни хикмәт был.

Өсәүҙән-өсәү ҡалғас, һалды тағы бер хикмәтте Батырша:

— Падишаһ хәҙрәттәребеҙ, һеҙ, падишаһымыҙ вәзире алдында ғисъянсы яманаты алған атымды, гонаһтарымды юйыр өсөн тәүбәгә килеп, таҙарынып, әғлә олуғ заттарыбыҙҙан ярлыҡауҙар үтенер инем, – тине ул түбәнселек менән. – Әгәр христиан диненең әғләлегенә инанһам, шул дингә күсеп, был фани ғазаплы донъяларҙан ыҙа-язаһыҙ үтер инем, бәлкем.

Бынағайыш, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ, хаҡ мосолмандан иң көфөр һүҙ — ысынмы был, ялғанмы, ихласмы йә рыямы — ышаныуы ҡыйын, хатта ки Шувалов графҡа, Шуваловтай күпте күргән, күпте ишеткән олуғ түрәгә. Әллә ысынлап та хикмәт эйәһеме был мулла тигәндәре. Синод әһелдәре менән кәңәшләшмәй, императрица ғәли йәнәптәренә хәбәр итмәй ярамаҫ. Бына һиңә сер!

Тоҡтоң төбөн ҡаҡты Батырша. Батшаға үҙ ауыҙынан еткерәһе тигән серен әлеге буш ҡалған ҡағыҙға төшөрҙө вәғәҙәһенсә: “Яныш старшина миңә һөйләне: “Илдә ҡатындан ҡатынға күскән хакимиәт бер бөтөр, сабыр ит, хәҙрәт. Тәхеткә яңы хаким – ир падишаһ ултырасаҡ, тигән һүҙ йөрөй, Аллаһы тәғәлә бойорһа, көтәйек, ул саҡ шәфҡәт һорарға ла ҡатланырбыҙ”. Мин һораным: “Кемдән ишеттең?” — тип. Яныш әйтте: “Түрәләр араһында шундай һүҙҙәр йөрөй!” — тип.

Юғарыла бәян вә ғәян ителгән эштәр, хәлдәрҙән башҡа падишаһымыҙ ғәзими хәҙрәттәренә бүтән әйтер һүҙем юҡ. Вә дәхи ғәйреләрҙә бүтән ҙур эштәр булғанмылыр, мин, фәҡирегеҙ Батырша, белмәйем”.

Бына һиңә Батыршаның батшаға әйтер оҙаҡ һаҡлап йөрөгән, оло түрәләрҙе төрлөсә уйландырған һуңғы сере. Дөйәләй тигәне төймәләй генә. Сер тигәне имеш-мимеш һүҙ, имеш.

Үлгән бүрене лә ике ҡат тунамайҙар. Яныш инде вафат. Сер түгел, буш һүҙ ине ул хәҙер! Төрмәлә ятҡан кеше донъя хәлдәрен, тыуған яҡтарын ҡайҙан белһен? Хикмәт хәҙер икенсе төйөнгә төйнәлде. Уныһы ла буш ҡыуыҡ булып сыҡмаһа тағы.

Йәшерен канцелярия начальнигының бойороғо буйынса, 24 майҙа Петербургтың Петропавловский соборы побы Стефан Левицкий Батырша менән христиан дине хаҡында һөйләшергә һәм уны шул дингә өндәмәгә саҡырылды. Поптар төрмә камераһына ғәҙәттә хөкөм ҡарары сығарылған христиан тотҡондоң тәүбәһен тыңлау һәм гонаһ-тәүбәләрен ҡабул итеү өсөн генә киләләр. Мосолман, етмәһә, мулла, имам-хатип кеүек дин әһеле ҡырына вәғәз менән поптың килеүе төрмә тарихында күрелмәгән хәл. Ислам динен яҡлап дау ҡубарған, шул енәйәте өсөн төрмәгә ябылған һәм ҡаты яза көткән мулланың үҙ иманына, Аллаһына хыянат итеп (ундай гонаһтар өсөн тамуҡ ғазаптары ғына бик аҙ), икенсе дингә күсергә йыйыныуы үҙе үк көфөрлөктөң көфөрлөгө. Быны ишетеү төрмә халҡы өсөн сәйер ине. Ғәжәйеп сәйер хәбәр ғәҙәттә тиҙ тарала, ул пайтәхеттең юғары даирәләренә, Синодтың үҙенә лә мәғлүм. Хәйер, аҙағы ни менән бөтөр, ғәжәйеп хәл булырмы, шуны көтәләр.

Әлегә һөйләшеү камерала тотҡон мулла менән поп араһында икәүҙән-икәү, гәрсә тылмас менән өсәү бара һәм бүтәндәргә сер булып ҡала. Ҡара хөлләләрен, ҡалпағын кейеп алған, тәреһен ҡулына тотҡан поп Левицкий, баштан уҡ килешелеүенсә, христиан диненең төп сифаттарын, ҡанундарын, ғибәҙәттәрен, ун вәғәзе, ғәйре диндәрҙән айырмалы әғлә һәм өҫтөн яҡтарын аңлата. Мосолман тотҡонон православиеның өҫтөнлөктәренә һәм камиллыҡтарына ышандырырға нисек тә тырыша. Шулай төшөндөргәс, аңлашыу, асыҡлашыу, ысын дини диспут, бәхәс башланып китә.

— Нәсрани дине Алланың берлеген вә мәңгелеген таныймы? — тип һорай Батырша.

— Таный, — ти поп Стефан. — Христиан дине тәғлимәте буйынса, Алла бар ғәләмдә үҙ асылы менән бер, берҙән-бер. Христос менән Мөхәммәт тә бер генә Аллаға инанырға ҡушалар. Әммә ләкин һәр дин Алланы үҙенсә аңлай, үҙенсә табындыра. Христиан динендә Алла өс һында һынлана: Алла-атай, Алла-ул һәм Изге рух. Шуға беҙ әйтәбеҙ: Во имя бога-отца, во имя сына, во имя святого духа. Улар үҙ-ара тиңдәр, айырылғыһыҙҙар һәм мәңгеләр.

— Изге Ҡөрьәнебеҙ әйтә: ҡолһу алла әлхәмделилла әл-сәммәд ләм юладум, йәғни Аллаһы тәғәлә берҙән-бер, бөйөк, мәңге вә тиңһеҙ ул, — тип аңлата Батырша. — Алла бер ниндәй ҙә һын алмай вә һис кемгә күренмәйҙер, күренмәмеш түгелдер. Алланың затын белмәк ғаҡылыбыҙҙың да ҡеүәте етмәйҙер. Аллаһы тәғәлә бар ғәмәлде иңләр, һәр ерҙе күрер, һәр ерҙә булыр илаһиәттер. Алла мәүжүдтер, әхәдтер, хойодтор, ғалимдыр, ҡадирҙыр, ғәфирҙыр вә ғәйрелер, ти Ҡөрьән, йәғни берҙән-бер, мәңгелек, бөтөнөһөн күреүсе, бөтөнөһөн белеүсе, ҡеүәтле, ҡөҙрәтле, ғәфү ҡылыусы һәм бүтән әғлә сифатлыдыр. Аллаһы тәғәлә туҡһан туғыҙ әғлә сифатҡа эйә, йөҙөнсөһөн үҙе генә беләлер — бөйөк серен. Библия илә Евангелие лә Алланы шулайыраҡ олуғлай, — тине

ул. Аллаһы тәғәлә пәйғәмбәрҙәр аша йөҙ ҙә дүрт китап индермештер әҙәмдәргә. Муса аша — Инжил, Мөхәммәт аша Ҡөрьән килмештер. Әммә ләкин һуңынан дин әһелдәре Алланың индергән күп һүҙҙәрен боҙғандар, хаҡ динлекте юғалтҡандар, ти Мөхәммәт пәйғәмбәр. Йәғни ислам дине хаҡ тиеү иҡрар вә иҡтиҡад ҡылабыҙ. Вә үҙгә диндәрҙе мәнсух вә батил диеү иҡрар вә иҡтиҡад ҡылабыҙ. Быға нисегерәк ҡарарһың, кем, хөрмәтле поп әфәнде?

— Һүҙең хаҡтыр, беҙ ҙә шулай тибеҙ. Муса пәйғәмбәр аша ингән Библияны йәһүдтәр күп йәһәттән боҙғандар аҙаҡ. Шуға ла Алла ергә Иисус Христосты ебәргән яңы тәғлимәте Евангелие илә. Унан Иҫке завет, аҙаҡ Яңы завет хасил булған. Христиан динебеҙ яңырған, иҫкеләрҙән, боҙоуҙарҙан арынған, камиллашҡан.

— Нәсриниәт динендә әле лә ҡапма-ҡаршылыҡтар, хатта ки бер-береһен инҡар итер мәҙһәптәр бар түгелме һуң?

— Бар, әлбиттә. Йәһүдиҙәр дине үҙенә башҡа. Грек-Византия дине үҙенсә. Католиктар тағы үҙгә. Православие яңыса. Протестанттары, лютерандары, ғәйреләре бар. Православиеның үҙ раскольниктары барлыҡҡа килгән. Былар бер олуғ дин эсендәге шул мәҙһәптәр, тәғлимәттәр айырымланышы. Ислам динендә лә мәҙһәптәр бар түгелме ни?

— Бар улар, әммә ләкин нәсрийҙарҙағыса үтә ҡаршылыҡлы, килешмәүсән түгел. Сөнниҙәр менән шиғыйҙар араһында ҡайһы бер Ҡөрьән сүрәләренә ҡарата төрлө ҡараш, төрлөсә шәрехләү бар. Исламдың фарыз ғәмәлдәре икеһе өсөн дә мотлаҡ. Уның иң олуғтары — Иман, Намаҙ, Ураҙа, Зәкәт, Хаж. Шуларҙы тотҡан хаҡ мосолман һаналыр.

— Фарыз ғәмәл тигәндән, православиеның бөйөклөгө һәм әҙәмиәтлеге уның ун заповедында: Алланы бөтә йөрәктән һөй, иң яҡыныңды ярат, ата-әсәңде хөрмәт ит, ялған һүҙҙе тыңлама, урлама, кеше үлтермә, аҙғынлыҡ ҡылма, һындарға табынма... Беҙҙең бөтә ғибәҙәттәребеҙ әҙәмдең рухын сафландырыуға, ололауға һәм һиммәтләүгә ҡоролған. Соборҙарыбыҙ ниндәй сәнәиғ нәфисә һәм мөһабәт беҙҙең, ғибәҙәт вә хорҙарыбыҙ рухи хурия өн-ауаздары менән һуғарылышлы. Тәре, иконаларыбыҙ тылсымлы илаһи ҡөҙрәткә эйә. Үҙен шәхес һанар әҙәми затҡа дингә бағынмай, Аллаға табынмай мөмкин түгел. Изге динебеҙ христианды мәрхәмәтлеккә һәм миһырбанлыҡҡа күндерер.

— Эйе, диндәр әҙәмдәрҙе изгелеккә өндәмәктәре менән әғләлер, инандырыр вә бағындырыр ҡөҙрәттәре илә илаһиҙыр, – тип хуплай поптың вәғәздәрен Батырша. — Иллә исламдың иң әғлә вә хаҡлылығына иманым камил. Ул мосолманды оло ун ете гонаһтан аралай, уның йөрәккә оялары: Аллаға ышанмаусылыҡ, дәһрилек; өсәүһе йоғор: ялғанлау, яла яғыу, тел яраһы; өсөһө эскә инер: эскелек, бирәнлек, әҙәм хаҡын ашау; икеһе ғәүрәттә булыр: аҙғынлыҡ, фәхеш; икеһе ҡулдалыр: кеше үлтереү, урлашыу; ҡалғаны аяҡ илә кәүҙәлә.

— Беҙҙең изге ун заповедь менән күбеһе тап килә бит. Христосыбыҙҙы ошо заповедь өсөн йәһүдтәр күрә алмайҙар һәм Голгофала ҡаҙаҡлап язалайҙар ҙа. Яңынан терелеп иленә ҡайтҡас ҡына уны изге йән тип таныйҙар, тәғлимәтен ҡабул итәләр. Иисус Христос олуғ пәйғәмбәр затыбыҙ ул.

— Ә беҙ, мосолмандар, Ғайса пәйғәмбәр Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙҙән алда килгән, Мөхәммәт килерен илгә хәбәр иткән изге зат тип беләбеҙ. Ҡөрьәнебеҙ, йәһүдтәр Ғайсаны үлтерергә ҡәсед ҡылғандар, Алла уны һаҡлап ҡалған, ти. Йәһүдтәр Ғайсаға оҡшаған икенсе кешене генә бағанаға ҡаҙаҡлағандар, Ғайса пәйғәмбәр Мәрйәм ананан Алла ҡөҙрәте илә елдән ауырға ҡалып тыуған изгебеҙ. Муса, Ғайса, Мөхәммәт Аллаһы тәғәләбеҙҙең өс олуғ пәйғәмбәрелер, өс олуғ дини тәғлимәт индергән илаһиҙарҙыр. Раҫ был.

Тәүге осрашыуҙа Батырша мулла менән Левицкий поптың дин хаҡындағы әңгәмәләре шул рәүешле диспут-бәхәс төҫөн алып китә. Береһенең дә үҙ диндәренең иң хаҡ һәм әғлә икәнен ҡайталауға самаһы юҡ әле. Мулла инана алмағас, христиан диненә күсеү-күсмәү мәсьәләһе лә асыҡ ҡала. Быға Сит илдәр эштәре коллегияһы секретары тылмас Александр Турчанинов үҙе шаһит.

Өс аҙнанан һуң, 13 июндә, Батырша менән Левицкий поп тағы осрашалар. Был юлы ла тәржемәселек вазифаһын атҡарған Александр Турчанинов, улар православие дине, изге Троица, ун заповедь хаҡында әңгәмәләрен дауам иттеләр, тип яҙа. Батырша христиан динен ҡабул итергә ризалығын бирҙе, ти ул әлеге яҙмаһында.

Ләкин алдағы хәл-ваҡиғалар, бигерәк тә хөкөм ҡарары Батыршаның христиан диненә күсеүен тамсы ла раҫламай. Ул нисек хаҡ мосолман булған, шулай ҡала. Йәнен аяп, иманын һатыуға бармай. Уның, хаҡ булһа, христиан динен ҡабул итер инем, тигәндәре, поп менән бәхәстәре, хатта, Турчанинов яҙғанса, телдән килешеүҙәре пайтәхеттә үҙенә күрә бер сенсация тыуҙырып, ул хәбәрҙең императрица Елизавета Петровна хозурына ла барып ишетелеп, хөкөмөн мөмкин хәтлем еңеләйтеү, язаһын күпмелер һуҙыу хәйләһе әмәле генә булырға тейеш.

Шулай хөкөм эше һаман һуҙыла, хөкөмдарҙар үҙҙәре икеләнә башлай, язаны күпмелер еңеләйтмәксе итәләр. Аҙаҡта Йәшерен канцелярия начальнигы граф Александр Иванович Шувалов үҙе тығыла һәм һуңғы ҡәтғи нөктәне ҡуя.

— Хөкүмәт енәйәтсеһе Батыршаны фетнә ҡубарғаны өсөн иң ҡаты хөкөмгә — ҡамсы менән туҡмап, танау япраҡтарын өҙөп язалағас, Рогервикҡа мәңгелек һөргөнгә ебәрергә ҡарарландыҡ, — ти империяның обер-прокуроры.

— Шунан да юғарыраҡ яза юҡмы ни ундай мятежникҡа? – тип һорай Шувалов.

— Иң юғары хөкөм — мәңгелек һөргөн, Ваше сиятельство, – ти обер-прокурор. — Үҙегеҙгә мәғлүм, үлем язаһы статьяһы бөтөрөлгән.

— Әгәр ул һөргөндән ҡасып китһә, иленә ҡайтып яңынан фетнә күтәрһә?

— Һаҡлау — уныһы һеҙҙең эш, Йәшерен канцелярия начальнигы хәстәре. Ә бығаулы, ҡарауыллы каторжник ҡайҙа китә алһын?

— Ул бығаулы, конвой ҡарауыллы көйө ҡасырға маташҡан хәтәр енәйәтсе.

— Ни генә булмаһын, бүтән статья юҡ.

— Хөрмәтле обер-прокурор, Батыршаның иң яуыз дәүләт енәйәтсеһе һәм илебеҙ именлеге өсөн иң ҡурҡыныс тотҡон икәнлегенә баҫым яһап, уны Шлиссельбург ҡәлғәһенә мәңгелеккә ябырға хөкөм итеү кәрәк. Шунһыҙ ул хөкүмәтебеҙгә, башыбыҙға өҫтәмә бәлә булыр.

...Йәшерен канцелярияның 1758 йылдың 24 декабрь хөкөм ҡарары ҡаты ине: Батыршаны, императрицаға ҡаршы дәүләт енәйәтсеһен, ҡамсы менән рәхимһеҙ язаларға һәм, танау япраҡтарын йолҡоп алып, ҡаты ҡарауыл аҫтында мәңгелеккә Шлиссельбург ҡәлғәһенә оҙатырға.

Ике көндән Батырша ҡамсы менән рәхимһеҙ язаланды һәм, танау япраҡтары йолҡоп алынып, Санкт-Петербург гарнизоны ҡарауылы аҫтында өс ылау менән Шлиссельбург коменданты премьер-майор И.Бередниковҡа оҙатылды, тип Сенатҡа хәбәр ителде.

Шул уҡ көндө конвой Шлиссельбург крепосына етеп, Батырша мәңгелеккә казематҡа ябыла. Мәңгегә, таш ҡапсыҡ эсендә интегеп үлмәгә.

Шуныһы ғәжәп, Батыршаны тыуған ерендә мишәр Яныш Абдуллин старшина эҙәрләй, уны мишәр старшинаһы Сөләймән Диваев хөкүмәт ҡулына тотоп бирә, төрөктән аҙған Александр Турчанинов Мәскәүҙә, Петербургта тикшереү эштәре ваҡытында уның тәржемәсеһе була, хатта һуңғы төйәге Шлиссельбург крепосы казематына ла мосолмандан суҡынған кенәз Девлетчеров илтеп тапшыра. Ғүмере буйы үҙенекеләр, үҙ ҡандары эҙәрләй...

...Шлиссельбург. Санкт-Петербургтан бары алтмыш саҡырым ары, Неваның Ладоганан ағып сыҡҡан урынындағы кескәй утрау-ҡәлғә ул. Алты бастионлы бейек таш диуар менән уратылған, эсендә ике таш төрмә. Шуның Йәшерен йорт исемләнгәненең таш казематына яптылар Батыршаны. Уны мәңгелеккә йәшерер һәм яйлап үлемгә дусар итер төйәге – таш ләхетелер инде.

Шлиссельбург таш казематтары Рәсәйҙең күпме ҡурҡыныслы кешеләрен — фетнәселәрҙе, ихтилалсыларҙы, азатлыҡ даулар дворяндарҙы, хатта батшалыҡ вариҫтарына хәтлеһен үҙ ләхетенә һалып тереләй серетеп һәләк итмәгән дә мәңгегә йотмаған икән. Батырша менән бер дәүерҙәрәк ябылған батша вариҫы Иоанн Антоновичтың фажиғәле үлеме генә лә ни тора. Батша булаһы кешене, батша һарайы интригалары ҡорбанын, тәхеткә ултыртыр өсөн ҡотҡармаға тип, Шлиссельбург төрмәһенә үтеп ингән офицерҙар болаһы ваҡытында сәнсеп үлтермәһендәрме.

Ә батша ҡоло Батырша?.. Нисәмә йылдар был тар, һалҡын, еүеш таш ҡапсыҡта яталыр инде ул. Күпме аһ-зарҙары, бәддоғалары, иңрәүҙәре ошо таштарға һеңгәндер. Өн-һөрәндәрен төрмә һаҡсыларынан башҡа кем ишетһен?..

Ниндәй генә ыҙа-яфалар, яза күрмәгән бында Батырша: ул туҡмалыуы, ул асҡа интектерелеүе, ул мыҫҡылланыуы, ул бер өнһөҙ-һөйләштереүһеҙ тереклеге... Күрһәләр, уны туғандары ла таный алмаҫ ине. Йөҙҙәре тамам һары-ҡараға әйләнеп, сырышып ҡатҡан. Иллеһе лә етмәгән ир бәлтерәп бөткән ҡарт ҡиәфәтендә. Башы, ҡырау тейгәндәй, сал, йөҙө йөн-төктәр менән ҡапланған. Оло кәүҙә ҡурышып ҡалған. Таштан бәргән һалҡын һәм еүештән аласа төрмә кейемгенәһе күгәреп, сусалып бөткән. Тәндәренә саҡлы сереп аға башлаған һымаҡ. Тән тигәне лә ҡоро һөйәк

тә тире генә инде. Бығау һалынған беләҙек, енсек тирәләре ҡайышланып ялтыраған. Зиндан эйәһе өҙлөкһөҙ йүткерә, зәңге менән сирләй. Ғүмергенәһе барҙыр шул, Хоҙайы бынса мөшкөллөгөнән, ғазаптарынан ҡотҡарып ҡуйһасы, ғазраил фәрештәһен генә ебәрһәсе. Һалҡын таш диуар нәфрәтләнә лә, ҡыҙғана ла белмәй шул. Каземат зәнзәләтенә ләғнәт. Рухы ғына түгел, йәндәре лә һүнеп, тәндәре лә туңып баралыр инде Батыршаның. Исемен аҡлар, есемен һаҡлар билдәһе күҙ ҡараштарында ғына күпмелер ҡалғандыр, моғайын. Бихисап доғалар уҡып, теләктәр теләп, тәүбәләр ҡылып, Аллаһынан ярлыҡауын да, йәндәрен йәһәтерәк алдыртыуын да ялбарып ҡараны — ташта ташмы ни Аллаһы ла (Тәүбә! Тәүбә!). Ҡулына Ильяс ҡылысы эләгеп, ошо таш диуарҙарын бер һелкетеү менән емергеһе, йәнен күктәргә осорғоһо, хатта йәһәннәмдәргә атҡыһы килгән саҡтары күп булды. Машалла, Хоҙайы мөғжизәләрен ник ебәрмәй, был ҡара һалҡын ташты, ҡара яҙмыш кәртәләрен ник емермәй икән?

Ҡанса төндәрҙең береһелер, йәнә һаташып уянды Батырша. Үҙе шайтандар менән талаша, йәне ғазраил менән алыша, имеш. Йә хоҙа!.. Абайлай, май шәменең шәмдәлдән һүрән генә яҡтыһы ишеге алдына төшә. Нишләптер ишек ярым асыҡ. Арыраҡ ҡарауылсыһы ҡалғый-ҡалғый йоҡлап ултыра, икенсеһе бөтөнләй үк әүен баҙарында. Ҡапыл күҙе төшә: бер балта ята. Оҙон һаплы ысын балта. Хоҙайы килтереп ҡуйҙырғанмы? Әллә әлеге ғазраилыныҡымы? Әллә тағы Ильяс ҡылысы урынынамы?..

Йоҡоһо осто тотҡондоң. Бәндәгә барыбер бер үлем, үлемдән ҡалым юҡ. Әжәл менән алыш батырҙар өлөшө түгелме? Әллә тәүәккәлләргәме? Хоҙай бирмәç быныдай саҡты һәр саҡ. Тоторға ла ҡарауылсыны йәһәннәмгә оҙатырға. Икенсе ҡаттың түбәһенә менергә. Түбә ҡапҡасын бер шәйләгәйне бит. Бикле икән, балтаһы бар ватырға. Арҡан табып, таш диуарҙан төшөргә. Причалда кәмәләр булмай булмаç, ултырырға вә даръяға инеп юғалырға.

Йәшен тиҙлегендәй үтте был уйҙар. Хоҙайға тапшырып тәүәккәлләне.

Батырша, шик-шөбһәләрен һыпыра ташлап, бығауҙарын шылтыратмай, һаҡ ҡына баçып балта янына килде, ҡулына алды – һәлмәк яйлы балта. Ике һаҡсыһы ла бер ни тоймай йоҡлап ултыра шул көйө. Мылтыҡтарын алдарына ҡаушарып ҡосаҡлағандар, баштар һалынған. Тирә-йүндә, бар төрмәлә шылт  иткән өн юҡ.

Беләк һеңерҙәре тартылды, балта менән кирелеп бер орҙо һаҡсы башына... Шарт итеп ҡалды, башы икегә ярылып китте, буғай, ыһ иткән тауышын да ишетмәне. Ҡан баçҡан күҙе аҡ-ҡара күрмәй, икенсеһенә уҡталды, унығының башынмы, муйынынмы киçә бирҙе. Быныһы аһылдап иҙәнгә ауҙы. Эргәлә аяҡ тауыштары тыҡылданы. Батырша стенаға һыйынды. Береһе алғы ҡарауыл бүлмәһенән килеп инеү менән аҡырып таш иҙәнгә тәгәрәне.

Батырша, ҡасмаҡ булып, оло коридорға сыҡты. Ҡараңғыла бер һын шәүләләнде генә, унығына йәнә тондорҙо балта менән.

Ауыр бығауҙарын күтәреп, атлауҙарын оноткан аяҡтарын саҡ һөйрәп, коридор буйлап алға, икенсе ҡат баçҡысына ынтылды. Әммә коридор-

ҙа йүгерешкән аяҡ тауыштары ишетелде, шау-шыу көсәйҙе. Тревога ҡупты. Алдында ҡараңғы аралаш биш-алты ҡоралды һаҡсы пәйҙә булды. Күреп ҡалдылар үҙен. Ҡапыл шартлау яңғыраны, тәнен пуля яндырып өтөп үтте...

Шул сәғәтендә үк комендантты уятып, май шәмдәр менән коридорҙы яҡтыртып килеп ҡарағанда Батырша ҡанға батып үлеп ята ине инде. Әллә нисәмә штыҡ сәнскән урындарынан сөбөрләй-һарҡый ҡан аға һаман. Эргәһендә ҡанлы балтаһы ята. Тимәк, янъялы менән дәжжалы бергә булған. Әҙәм ҡотолғоһоҙ утрау-төрмәнән ҡасмаҡ булып, бығаулы көйө бер үҙе баш күтәреп, тиңһеҙ алышта аяҡ өҫтө батырҙарса йән бирә шулай.

Был 1762 йылдың 24 июле ине.

Иртәгәһен ҡәлғә коменданты подполковник Иван Бередников төнгө үлемесле алыш хаҡында Сенатҡа аңлатмалы хат-рапорт яҙырға мәжбүр. Унда төнгө фажиғә шаһиттар һүҙе ярҙамында былай аңлатыла:

“Правительствующему Сенату от подполковника Шлютельбургского коменданта Ивана Бередникова доношение.

У содержащегося в Шлютельбургской крепости колодника Батырше находились на карауле с данною на тот караул инструкциею полков Санкт-Петербургского гарнизона, а именно Невского капрал Данила Никитин, солдаты Максим Хомутов, Григорий Епифанов, Санкт-Петербургского Андрей Лазарев. Который колодник, имев у себя на ногах ножные с заклепом железа, а на руках наручник, сего июля на 24-е число по полуночи в первом часу, напав на оных, во-первых, на капрала, и солдат спящих, на которых и бывший на часах солдат Епифанов при заженной свече заснувший был, о чем он уже извинение принес, что подлинно спал. Оной колодник, взяв принесенной в казарму солдатом Хомутовым топор (которого, також никакого орудия, чем человек может себя повредить, по данной на тот караул инструкции в арестанской казарме иметь было запрещено. Сверх того, чтобы он из-под караула утески не сделал, на собою ж и караульному каковы повреждения таковыми орудиями не учинил), по одиночки у капрала Никитина тем топором голову разрубил на двое, у солдат – у Хомутова головы левую сторону разрубил и правый висок проломлен, у Лазарева в двух местах брюхо пропорото, у головы же по левую сторону тела схватил, у Епифанова, который был на часах, в двух местах голову разрубил же, из которых капрал Никитин, солдат Хомутов сего ж числа умерли, а Лазарев и Епифанов лекарем пользуютца. Оной же колодник Батырша и сам умер без всяких язв и побой...”

Батыршаның ғисъянлы, болалы, мажаралы көрәш юлына бәйле иң һуңғы документ был асылда.

Оло урмандар янғыны харабаларын күргәндәр күҙаллайҙыр: ҡасандыр тауҙар, үҙәндәр ҡаплап ултырған ҡалын-ҡалын ҡара урмандар янып юҡҡа сыҡҡан; ҡайһылыр төбәктәре ере-торфы менән бергә янып, уйым-уйым тәрән соҡорҙарға әүерелгән, тегендә-бында тороп ҡалған ағас тамырҙары, ҡумырыҡтар, төпһәләр һерәйеп, уйымдары өңрәйешеп тора.

һүнгән торомбаштар төҫлө оло-оло олондарҙың янып бөтмәгән киҫәктәре, киҫәүҙәре тырым-тырағай аунап ята. Ут төпкә, ер аҫтына, тамырҙарға киткән урындарҙа урман-ер һаман төтәҫләп ята. Ағастары менән бергә еркәйҙәре лә ҡушылып янған, ҡыйралған шул. Ҡайһы бер төбәктәрҙә өйкөм-өйкөм таштай ҡарағастары ғына, хәтәр янғындарға бирешергә теләмәгәндәй, ылыҫлы ботаҡ, остары янып бөтһә лә, олоғара олондары менән элеккесә баҫып ҡалғандар. Улары өтөлһә-мөнтәлһә лә, тамырҙары һау булһа, йәренге йылға япраҡ ярып, терелеп китерҙәр, моғайын. Шуларға һыйынып, йәшеренеп ара-тирә йәшерәк ағастары, ваҡ үҫентеләре лә иҫән ҡалғылаған. Улары үрсем бирер кеүек. Ә башҡаһы хараба ла хараба, вайран да вайран инде.

Әммә мәңге тере тәбиғәткә хайран итерлек. Әгәр ике-өс йылдан ошо янғын харабалары урынына яңынан килһәң, таный ҙа алмаҫһың, бәлки. Бөтә ер йәм-йәшел. Һәр ҡайҙа йәш ағастар ҡурпылап сыҡҡан, яңы туйра ҡулҡылар барлыҡҡа килгән. Янмай, аумай ҡалған ағастар япраҡҡа ҡапланған. Уйым-уйым соҡор ямдарын шул уҡ туйра, ҡулҡылар ярым тигеҙләп баҫып үҫеп киткән. Ара-тирә генә ҡороған ағас олондары, ҡыу ярҡылар арала һерәйеберәк ултыра. Шулары ғына элекке харабаларҙы хәтерләтә.

Яу-ҡазаға ҡалған ауылдар, кешеләр яҙмышы ла шулайыраҡ. Ирәндек тау тирәһе, Талҡаҫ яны, Һаҡмар, Эйек буйы ауылдарының күбеһе 1755 йылғы яуҙан һуң янып, таланып, тарҡатылып, харап булып бөткәйне. Ихтилалда ауыл-ауылы менән ҡатнашҡандарының барыһын ғаилә-ғаиләһе менән ситкә, үҙәк Рәсәй яғына олаҡтырып, һөргөндәргә һөрөп, ауылдарының көлөн күккә осорҙолар. Ирәндек, Һаҡмар буйҙарындағы Бөрйән, Монаш, Ямаш, Байһары, Янһары, Нуғай кеүек боронғо ауылдар шулай юҡҡа сыҡты. Нигеҙләүселәре яу-ихтилал үҙәгендә булған яугирҙарҙың Өмөт (Өмөт Йәнәкәй нигеҙләгән ауыл), Алҡыш (нигеҙләүсеһе Алҡыш Һөйөндөк старшина), Исмәғил (нигеҙләүсеһе Исмәғил Айыҡкол сотник), Бикбулат (Бикбулат Алҡыш старшина ауылы), Биктимер (Биктимер Әйет исеменән), Мәмбәтсура (Мәмбәтсура Аптыраҡ старшина исеменән), Илекәй (Илекәй Шимәй тархан ауылы), Тәкәй (Алынсаҡ Тәкәй нигеҙләгән ауыл), Мырҙағол (Сысҡан Мырҙағол исеменән), Күҫәк (Күҫәк Келәүбирҙе аҡһаҡал исеменән) ише ауылдарының күбеһенең урынында шулай уҡ көл-күмер ятып ҡалды. Һаҡмар буйындағы тағы Тәнәкәй, Ҡолмырҙа, Ҡашай, Яҡшыбай, Ҡалмыш, Кинйәғол, Байтығол, Мөрсәлим, Төйәләҫ буйындағы Ильяс тигән матур-матур ауылдар ҙа юҡ ине.

Боронғо ауылдарҙың ҡайһы берҙәре, әле исемләгәндәрҙән бер нисәһе, исемдәрен алыштырып, ярым янған, таланған, буш ҡалған ерҙәренән яйлап, тәрнәкләнеп ишәйеп киттеләр. Зиндандарға ябылған, һөргөндәргә ебәрелгән нигеҙләүселәрҙең үҙҙәрен дә, исемдәрен дә онотторор өсөн ауыл исемдәрен дә алыштырырға мәжбүр иттеләр. Исмәғил ауылы – Иҙрис, Ҡотлоюл ауылы – Таулыҡай, Алҡыш ауылы – Кинйәбулат (аҙаҡ Буранбай), Бикҡужа ауылы – Күсәй булып китә.

Үлгән артынан үлеп, олаҡтырылған артынан олағып булмай. Иҫән ҡалғандарға йәшәргә, донъя көтөргә кәрәк. Көл-күмер өҫтөндә ауыл-

ды тергеҙмәк ярамай, янында йәки арыраҡ яңыларын һалдылар. Харабалар урынында яйлап яралар ямалғандай, үләндәр, ҡурпылар ҡалҡынды. Иҫке йәйләүҙәр яңынан йәмләнә башланы. Ҡалған мал-тыуар үрсене.

Халыҡ ни күрһә, ил менән бергә күрҙе. Ил-йортона яу ябырылғанда, карателдәр баҫҡанда ауыл-ауылы, иләү-иләүе менән Яйыҡ аръяҡтарына ҡасты ярты ил. Ҡырғын яман әжәл, үләт булып, сит-ят ерҙәргә ҡыуҙы уларҙы. Яуҙарҙа күпме ир-егеттәре баштарын һалды, юлдарҙа күпмеһе ятып ҡалды. Аҙаҡ ҡыр-ҡаҙаҡтар ҡара яу ҡубарып ябырылды.

Башҡорттар Яйыҡ аръяғына, далаларға илле меңгә яҡын кеше китеп, аҙаҡ үҙ тыуған ерҙәренә бер сирек өлөшө, ун мең тирәһе әҙәм кире ҡайтып төпләнеп китә алдымы-юҡмы? Үҫәргәндәрҙең, ҡыпсаҡтарҙың байтағы иркен ерҙәрен ташлап, оло юлдарҙан йыраҡ-йыраҡ, ышығыраҡ урындарға, тау-урман яҡтарына күсенделәр. Хатта бөрйәндәр, йәмле Һаҡмар буйҙарын ҡалдырып, Ағиҙел үрҙәренә үттеләр, Собханғол, Байназар, Монасип кеүек эре ауылдарҙы нигеҙләнеләр.

Ил яйлап яраларын уңалта, тормош һәүетемсә үҙ ағышына төшә. Ниндәй ҡырғын, үләттәр килмәһен, йоттар йотмаһын, Уралтауҙы туҙҙырып, Ағиҙел, Һаҡмарҙарҙы ҡоротоп бөтөп булмағандай, шуның буйҙарында борон-борондан йәшәгән халҡын да ҡырып ташлап булмай. Халыҡ – ул мәңгелек. Уралына, тыуған еренә мәңгелеккә ереккән башҡорт яттарға баш бирмәҫ. “Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын”, – тип юҡҡа ғына йырлағанмы ни башҡорт.

Китеүҙәренә дүрт-биш йыл тигәндә ҡыр-ҡаҙаҡтар араһынан имен-аман бар ғаиләләре менән ҡайтып төшәләр Талҡаҫ, Һаҡмар буйҙарына Бөрйәндең атаҡлы ир-азаматтары, 1755 йылғы ихтилалды башлаусы яугирҙары – Әмин, Сураш батырҙар, Хоҙайбирҙе мулла, Темәс батыр, Йылан Этҡол. Бергә киткән балалары ҙурайған, яңылары тыуған. Әмин менән Ҡолансәстең Юлбирҙе исемле улдары бар. Үҙҙәренсә донъялары түңәрәк, эштәре мөбәрәк. Ҡайтыу менән улар элекке янған, тарҡалған ауылдары ҡырына яңы ауылдарға нигеҙ һалалар, тыуған ерҙәренең ҡәҙерен белеп, тағы сәмләнеберәк йәшәп китәләр. Шулай Һаҡмар буйҙарында Әмин, Темәс, Сураш, Этҡол исемле атаҡлы яңы ауылдар ҡалҡып сығыр.

Тарих күрһәтер, улар үҙҙәре һәм уландары аталарының, ҡартаталарының, туғандарының үткән яуҙа түгелгән ҡандары, өҙөлгән ғүмерҙәре ҡонон алыр. Оҙаҡламай ярты Рәсәйҙе ҡаплап алыр 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында булыр быныһы. Әмин батыр, Сураш батыр, Темәс батыр исемдәре яңынан тағы ҡеүәтлерәк дәһшәт һалыр Ырымбур губернаторы, заводчиктары, төрлө яуыз түрәләре йөрәгенә. Ҡуш башлы, тимер тырнаҡлы ҡан эскес зәғиф ҡарағош менән яңынан ҡеүәтлерәк оло яуҙар ҡубыр.

Уралтауҡай емерелмәһә, Ағиҙел, Һаҡмарҙар ҡоромаһа, илен, иркен, үҙ һиммәтен һаҡлар аҫыл улдарын тыуҙыра, үҫтерә торор башҡорт халҡы ғүмер-ғүмергә.